Бөтә илдәрҙең пролетарийҙары, берләшегеҙ!

ЙӘШЛЕК

1923 йылдан
башлап сыға

ВЛКСМ-дың Башҡортостан Өлкә Комитеты органы

Шишәмбе
20
МАРТ
1990 йыл.
№ 34 (7540).
Хаҡы 3 тин.

БЫЛ ҺАНДА

Һынатмайҙар егеттәр
Битарафлыҡ ҡайҙан килә?
—2-се бит.
ҠОТЛОЮЛ УҢҒАНДАРЫ
Төньяҡ райондарҙың тупрағы
—3-сө бит.
Әманәт
Махсус бит.
—4—5-се биттәр.
МҮКЛӘНМӘҺЕН КҮҢЕЛЕБЕҘ
Вил ҒҮМӘРОВ
ЯҘЫЛМАҒАН БЕР ТАРИХ ЭҘЕНӘН
(Эссэ)
—6-сы бит.
ГЛОБУС
—7-се бит.
ИҒТИБАР ИТЕГЕҘ: КОНКУРС!
—8-се бит.



Айболит булайым, тиһәң...

Балалар врачы тураһында һүҙ барһа, күҙ алдына иң тәүҙә доктор Айболит килеп баҫа. Шуға ла кескәйҙәрҙе дауалаусы табибты, мөләйем, баҫалҡы, эскерһеҙ һәм ярҙамсыл итеп күргe килә. Талбазылағы үҙәк район больницаһының отоларингологы Рөстәм Әбдүшевҡа ошо сифаттарҙың бөтәһе лә хас тиерлек. Комсомол эштәрендә мауығып ҡатнашыусы, спорт һөйөүсе был егет үҙе лә тормошто балаларса, оноторлоп, ярата. Шуғалыр, бәләкәй пациенттары менән уртаҡ тел табыуы, уларҙың серҙәренә төшөнөүе еңелдер уға. Ә күңел биреп башҡарған эш һөҙөмтәһеҙ булмай.

Ю. КӘРИМОВ фотоһы.

Таңатар урта мәктәбендә «Школьник» кооперативын берence спратта дәрестән һуң балалар ваҡытын бушҡа уҙғармаһын, мажара эҙләп ҡаңғырмаһын өсөн ниндәйҙер эш менән мауыҡтырыу ниәтендә ойошторғандар. Унда шөғөлләнгән балаларға эш хаҡы түләп, хеҙмәттең матди файҙаһын да күрһәтеү, ҡыҙҙарҙы хужабикә булырға, тегергә, аш-һыу әҙерләргә, ә малайҙарҙы ҡаҙаҡ-сүкеш тота белергә өйрәтеү маҡсаты ла күҙ уңында тотолған.

ХЕҘМӘТ ТӨБӨ — ХАЗИНА

КООПЕРАТИВ эше үҫмерҙәргә ыңғай тәьҫир иткән, хоҡуҡ боҙоуҙар ҡырҡа кәмегән. Ә элек мәктәп был йәһәттән районда беренсе урындарҙың береһен биләп торған. Былтыр бәлиғ булмағандар эше буйынса инспекцияға иҫәпкә бер генә уҡыусы ҡуйылыуы балалар араһында тәртип яҡшырыуын күрһәтә.

— Балаларҙа яуаплылыҡ тыуа. Кооперативта эшләгән балалар бер нәмәне лә ватмаясаҡ, сөнки улар нимәлер яһау өсөн күпме көс түгелгәнен аңлай, — ти мәктәп директоры Ф. Ғ. Шәмсиев.

«Школьник» кооперативы райондағы балалар баҡсалары заказдары буйынса карауаттар, ултырғыстар, төрлө баҫҡыстар, һикереү өсөн снарядтар һәм башҡа кәрәк-яраҡ эшләй. 9-сы класс уҡыусылары Ринат Камалов, Айрат Насибуллин, Илфир Ғәлләмов, 8-се кластан Таһир Ғәлләмов, 7-нән — Рәмил Ғәбдуллин һәм 6-нан Динарит Камаловтар алтын ҡуллы оҫтаға өйләнгән. Улар үҙ эшенән кинәнес табып ҡына ҡалмай, эш хаҡы алып, ғаиләһенә ярҙам күрһәтә. 14 йәше тулған уҡыусыларға хеҙмәт кенәгәһе асыла, тимәк, улар мәктәп йылдарында уҡ эш стажы туплай башлай. Һөнәрҙе мәктәпте тамамлау ваҡыты килеп еткәндә түгел, үҙҙәрен эштә һынап ҡарап һайлай. Кооператив уҡыусыларға һәләтлектәрен асыҡларға ярҙам итә. 8-се класс уҡыусылары Азат Нәбиуллин, Рәфил Сәитғәлиев, Искәндәр Ситдиҡов, 11-се кластан Илгиз Ғиләжевтар ағасты көйҙөрөп һүрәт эшләү оҫталыҡтарын нәҡ ошонда арттырғандар ҙа инде. Улар эшләгән ит тураү өсөн таҡталар һәр хужабикәнең күңеленә хуш киләсәк. 10-сы кластан Гөлнара Вәлиева, Лиана Латипова, Эльвира Сәлимгәрәева зауыҡ менән буяған буяуҙар уларҙы тағы ла йәмләп ебәрә.

Ҡыҙҙар ситса әске күлдәктәр, алъяпҡыстар, береттар, мәктәп мастерскойы өсөн бейәләйҙәр тегә. Тегеү өсөн материал кооператив аҡсаһына һатып алына. Көҙ көнө Өфөлә мәктәптәр йәрминкәһендә «Школьник» кооперативы балалар баҡсалары өсөн карауаттар, кәрәктәр, ит тураү өсөн таҡталар, эске күлдәктәр һатҡан. Улар тауарҙарын рекламалар өсөн барған.

Кооператив тауарҙары һатылмай ятмай. Үткән йылда балалар баҡсалары өсөн кооперативтан Борай район Советы — 1720, Таңатар ауыл Советы — 1082, Борай районының «Мир» колхозы — 1875, Краснокама бырауылау идаралығы 2750 һумлыҡ тауар һатып алған.

Мәктәптең хеҙмәт дәресе программаһы кооператив планына яраштырып төҙөлә. Әйтәйек, нимәлер йәбештереү дәресе икән, кооперативтың ниндәйҙер изделиелары йәбештерелә.

УҠЫУСЫЛАРҘЫ кооперативта хеҙмәткә өйрәтеү эшенә кооператив председателе Р. С. Ситдиҡов, уның алмаштырыусыһы Ф. Ғ Шәмсиев етәкселек итә. Тауарҙарҙы художестволы биҙәү эшен Ф. Ә. Бәләева алып бара. Бынан тыш ҡыҙҙар ашханала аш-һыу әҙерләүгә өйрәтелә. 11-се класс ҡыҙҙары кооперативта договор буйынса эшләгән С. Ә. Фазлетдинова етәкселегендә фермаға эшкә йөрөп, мал ҡарау нескәлектәрен үҙләштерә.

Кооперативта шөғөлләнгән уҡыусылар бөтәһе лә балта оҫтаһы йәки тегенсе, ашнаҡсы йәки һауыныусы булыр тип әйтеүе ҡыйын. Шулай ҙа күңеленә оҡшаған һөнәргә тоғро ҡалыусылар ҙа бар. Үткән уҡыу йылында бер нисә ҡыҙ тегенселеккә өйрәнер өсөн профессиональ-техник училищеға, ә Илсур Хәмәтнуров төҙөлөш техникумына уҡырға ингән.

Ниндәй яҡтан ғына ҡарама, «Школьник» кооперативы уҡыусылар өсөн файҙа килтерә.

Г. ҺӘҮБӘНОВА.
Борай районы.



ҺҮРӘТТӘРҘӘ: ташсылар бригадаһы; иҫке котельный эргәһендә яңыһы төҙөлә; участка начальнигы Илдар Ҡаҙаҡбаев.

Ю. НӘРИМОВ фотолары.

БИТАРАФЛЫҠ ҠАЙҘАН КИЛӘ?

Кушнаренкола ВЛКСМ район комитетында йәштәр үҙәге асылғанға бер генә ай. Тулы көскә ул февраль уртаһынан ғына эшләй башлаған. Үҙәк халыҡҡа һәм ойошмаларға фотоға төшөрөү, электр уты өсөн сымдар үткәреү хеҙмәте күрһәтә, биополе ысулы менән дауалау ойошторған. Дауалауға көслө белгес йәлеп ителгән. Бынан тыш, Шәрип ауылында концерт группаһы — комсомол ойошмаһы секретары З. Ғилманов етәкселек иткән вокаль-инструменталь ансамбль дә йәштәр үҙәге составында эшләй.

— Концерт группаһы хәҙергә «күрһәтмә сығыштар» менән генә йөрөй. Оҙаҡламай, билеттар алғас, түләүле концерттар күрһәтә башлаясаҡбыҙ. Сәсеү осорона тиклем бер нисә концерт ҡуйып өлгөрөрбөҙ, тип уйлайым,— ти йәштәр үҙәге директоры Риф Гәрәев.

Үҙәктең киләсәккә пландары ҙур. Атап әйткәндә, ауылдарҙа ветеринария хеҙмәте күрһәтергә ниәтләйҙәр. Быға мөмкинлек бар. Ауыл хужалығы техникумынан буласаҡ зоотехниктарҙы йәлеп итергә йыйыналар. Бынан тыш, бүленгән фондҡа «Дружба» электр бысҡыһы һатып алып, өлкән кешеләргә утын ҡырҡып биреүҙе яйға һалырға уйлайҙар.

— Беҙҙең йәштәр үҙәге хужалыҡ исәбендә эшләй. Эштәр һәйбәт башланды. Хеҙмәтебеҙ халыҡта ҡәнәғәтләнеү тыуҙыра, ярҙамыбыҙҙы ҙур теләк менән ҡабул итәләр. Шуға күрә үҙ сығымдарыбыҙҙы үҙебеҙ ҡаплай алырбыҙ, материаль базаны нығытыуға өлгөшербеҙ, тип ышанам,— ти директор.

Йәштәр үҙәгендә лә, район комитетында ла егеттәрҙе бер нәмә борсой: демократияға ынтылыш ҡайһы саҡта бөтөнләй кире йүнәлеш ала. Өфөлә йәмәғәтселектең ВЛКСМ өлкә Комитетының йәштәр үҙәктәренә ныҡышмалы һөжүмдәрен күрәпме, Кушнаренкола ла ВЛКСМ район комитетын бюрократия ояһы тип ғәйепләп, бинаны китапханаға тапшырырға талап итеүҙәр башланған. Һүҙ ҙә юҡ, китапхана халыҡҡа ҙур файҙа килтерә һәм унда шарттар яҡшы булырға тейеш. Ләкин комсомол райкомы бөтә бинаны биләмәй бит, бер нисә бүлмәлә генә урынлашҡан. Уның бүлектәре КПСС район комитеты бинаһына күсә ала. Тик ҡалған подразделениелар, ошо уҡ йәштәр үҙәге ҡайҙа урынлашыр? КПСС райкомына бара аламы ул? Рәсми бинаға йәштәр үҙәгенең ихтимал клиенттары бик иркенләп йөрергә теләрме? Дауалау әле йәштәр үҙәге директорының бүлмәһендә үткәрелә. Райком хеҙмәткәрҙәре рәсми урында кешеләрҙең сират ойоштороп ултырыуына түҙерме? Бик тә икеләнәм.

Ә дауаланырға теләүселәр бик күп, яҙылған кешеләр исемлеге июль айына барып терәлгән дә инде. «Башҡаса яҙмай торорға кәрәктер, ахырыһы»,— тип ҡуйҙы Риф, исемлекте күрһәтеп. Йәштәр үҙәгенең был эше кешеләргә файҙалы түгелме? Әллә утын ҡырҡып биреү насармы? Электр сымдар үткәреп, «Ильич лампочкаларын» балҡытыу яҡшы түгелме? Ҡарт-ҡороноң эш эшләтеү өсөн шешә эҙләп йөрөүе яҡшыраҡмы ни? Әллә Кушнаренкола китапхана урынлаштырырлыҡ берҙән-бер урынмы ул ВЛКСМ район комитеты бинаһы?

Демократия бик һәйбәт прогресс, тик ул бер яҡтан икенсе яҡҡа һуғылыуға әйләнһә, бер яҡшылыҡҡа ла килтермәйәсәк.

Хәҙергә бөтә тормошобоҙ йәштәрҙе инҡар итеүҙең, уларҙы төрлө эшмәкәрлектән ситләштереүҙең бик күңелһеҙ һөҙөмтәләргә килтергәнен асыҡ күрһәтә. Бөтә нәмәгә битараф булыу, аяуһыҙлыҡ ҡайҙан килә? Уларҙың мәнфәғәттәрен белергә, тормош һәм эш шарттарын яҡшыртырға, күңелле ял итеү мөмкинлектәре бирергә теләмәүҙә бит был бәләләрҙең сығанағы. Бөгөнгө көндә йәш кешеләрҙең мәнфәғәттәрен ғәмәлдә комсомол ғына хәстәрләй. Һәм уларҙы йәмғиәткә ҡаршы ҡуйырға түгел, ә дөрөҫ йүнәлеш бирергә кәрәк.

Г. РИЗУАНОВА.

ҺЫНАТМАЙҘАР ЕГЕТТӘР

1989 йылдың яҙында Аҡъяр ауылында «Мәләүесхимстрой» тресының хужалыҡ иҫәбендәге 3-сө төҙөлөш участкаһы (ХСУ) ойошторолдо. Уның төп бурыстары — МПМК базаһын, тимер-бетон изделиелар цехын, бетон иҙмә узелын һәм башҡа ярҙамсы объекттарҙы, әйтәйек, таҙартыу ҡоролмаларын реконструкциялау, котельный төҙөү, торлаҡ һалыу.

Бөгөнгө көндә участкала 60-тан ашыу кеше эшләй. Кешеләр йыйыуҙы дауам итәбеҙ. Коллективҡа тиҙ арала мастер йәки прораб табырға кәрәк. Планда ҡаралғанса, быйыл участка эшселәре 1 миллион 300 мең һумлыҡ капитал һалыуҙар үҙләштерергә тейеш. Әлбиттә, районға ярҙам кәрәк буласаҡ, сөнки үҙҙәренең базаһы юҡ, бөтә материал ситтән килтерелә: Мәләүеҙ, Стәрлетамаҡ һәм күпмелер кимәлдә Ырымбур өлкәһенең поставкалары менән эшләйҙәр. Материалдарҙы күпләп килтереү өсөн тимер юлдың һәйбәт эшләүе мотлаҡ. Автотранспорт менән күпләп ташып булмай, ҡиммәткә төшә, бөтә аҡса шуға китәсәк.

Хәҙергә торлаҡты үҙебеҙҙең хеҙмәткәрҙәр өсөн төҙөйбөҙ. Күптән түгел 2 фатирлы биш йорт сафҡа индерелде. Әлеге ваҡытта бәләкәй ғаиләләр өсөн өй төҙөйбөҙ, уны өсөнсө кварталда тапшырырға ниәтләйбеҙ.

Участкала Нурулла Нурмәхмәтов етәкселек иткән ташсылар бригадаһы айырыуса яҡшы эшләй. Эштә өҙөклектәр тыумаһын өсөн материалдар менән һәйбәт тәьмин итергә кәрәк. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, был йәһәттән бөтәһе лә шыма бармай. Шулай ҙа Н. Нурмәхмәтов егеттәре объекттарҙы һуплатмай тапшырырға тырышып, бөтә көсөн һалып эшләй.

И. ҠАҘАҠБАЕВ,
«Мәләүезхимстрой» тресының участка начальнигы.
Хәйбулла районы.

ҠОТЛОЮЛ УҢҒАНДАРЫ

«Искра» колхозы Күмертау ҡалаһы халҡын йәшелсә менән тәьмин итеү буйынса күп йылдар махсус хужалыҡ булып килде. Һуған, ҡыяр, помидор, кишер, кәбеҫтә үҫтереп, Күмертауҙың сауҙа ойошмаларына тапшырҙы.

Әммә йәшелсә үҫтереү менән шөғөлләнеү колхозға килем урынына зыян ғына килтерҙе. Сөнки йәшелсәселектә ергә, техникаға хужа булманы. Был эште башҡарған махсус бригада булһа ла, улар плантацияларҙы тәрбиәләп, утап өлгөртә алманы. Шуға ла бында ҡаланан күп кенә шефтар эшләне. Мәктәп балаларына ла тынғы булманы, аҙналар буйынса колхозға барып йәшелсә утарға тура килде уларға. Ҡаланан кешеләр ташыу өсөн колхоз йыл һайын автоколоннаға меңәрләгән һум аҡса түләне.

Илдә кооператорҙар хәрәкәте тураһында ишетеп-белеп йөрөгән Күмертау шоферы Мөхәррәм Ибраһимов уҙған йылдың көҙөндә йәшелсә үҫтереү тураһында хыял йөрөтә башлай. Шул хаҡта ҡалала эшләгән ауылдаштары — бер туған ағаһы Миҙхәткә һәм Азат Яманһаровҡа әйтә. Был хаҡта Азаттың атаһы менән кәңәшләшә.

— Егеттәр, ауылға ҡайтайыҡ та, кооператив төҙөп, кәбеҫтә үҫтереү менән шөғөлләнәйек,— ти Мөхәррәм Әхмәҙи улы Ибраһимов. — Мин иҫәпләп сығарҙым, 15 гектар кәбеҫтәне алһаҡ, моғайын, отолмабыҙ. Ә бер йәйҙә үк байтаҡ аҡса эшләп алырға ныҡлы ышаныс бар.

Егеттәр был тәүәккәл фекергә ҡушыла. Шулай итеп, «Искра» колхозының Ҡотлоюл ауылы егеттәре, байтаҡ йылдар Күмертауҙа эшләгән һәм йәшәгән Миҙхәт һәм Мөхәррәм Ибраһимовтар, ремонт-механика заводы мастеры Азат Яманһаров, уның туғаны, колхозда эшләгән Фуат — дүрт кеше кооператив төҙөй, председателе итеп Мөхәррәмде, бухгалтеры итеп — Азатты һайлайҙар.

1989 йыл башында колхоз администрацияһы менән договор төҙөйҙәр. Унда 15 гектар майҙанда кәбеҫтә үҫтереп алып, колхоз планын үтәргә һүҙ бирәләр. Колхоз биш йыл файҙаланыуға 20 гектар ер, «ДТ-75» тракторы, культиватор, кәбеҫтә ултыртҡыс бирә, техник ярҙам күрһәтә.

Әйткән һүҙ — атҡан уҡ. Егеттәр эшкә дәррәү тотона. Иң тәүҙә атайҙары йорттарында кәбеҫтә үҫентеләре әҙерләйҙәр. Азаттың атаһы Нәҙгәр Яманһаров — агроном, Мөхәррәмдеке — механизатор, улар егеттәрҙең эшенә бөтә йәнләп ярҙам итә, һәйбәт кәңәштәр бирәләр.

Тәүгә кооператорҙар дәртләнеп, ашҡынып көткән яҙ яҡынлаша. Егеттәр ғариза биреп эштәренән сыға. Ҡотлоюлға ҡайтып, яҙғы сәсеүгә әҙерләнә башлайҙар.

Көйөргәҙе йылғаһы буйындағы тигеҙ туғай ҡарҙан асылһа та, участканы ентекләп әҙерләй, насос һәм һыу торбаларын, ДДН-70 һыу һипкергесен тәртипкә килтерәләр.

15 гектар кәбеҫтәне ҡыҫҡа ваҡытта ултыртып бөтөү еңел эш түгел. Ултыртҡыс машинаны алты кеше хеҙмәтләндерергә тейеш. Был эштә кооператорҙарҙың ғаилә ағзалары актив ярҙамсылар була. Фәүзиә, Ғәшүрә Ибраһимовалар, Алһыу Яманһарова һәм Мөхәррәмдең улы Илшат кәбеҫтә үҫентеләрен һәйбәт итеп ултырталар.

Шифалы яҙғы ямғырҙар һәм даими һуғарыу һөҙөмтәһендә үҫентеләр баш күтәрҙе, артабан гөрләп үҫеп китте. Шул уҡ ваҡытта ҡый үләндәре лә ятып ҡалмай, кәбеҫтәләр менән ярышып ҡалҡа барҙы. Кооператорҙар бер көндә лә буш итмәй рәт араларын культиватор менән эшкәртте, әммә арҡырыға механик эшкәртеү мөмкин булмағас, уңған егеттәр ҡул көсөн йәлләмәне. Плантацияла бер бөртөк ҡый ҙа булмаһын өсөн, ваҡыт менән иҫәпләшеп тә тормайҙар, ҡояш ҡалҡҡандан киске эңергә тиклем эшләйҙәр.

Элекке йылдарҙа бында тиҫтәләгән кеше эшләһә лә, ҡый үләндәрен бөтөрә алмай, көҙ кәбеҫтәне үлән араһынан эҙләп ала торғайнылар. Ә быйыл дүрт кеше 15 гектар плантацияны ҡыйҙарҙан таҙа тотоп, бына тигән уңыш үҫтерә. Шәхси ҡыҙыҡһыныу һәм индивидуаль хеҙмәт мөғжизәһе бына шундалыр ҙа инде.

Уңышты үҫтереү менән бергә, уны йыйып алыу һәм тапшырыу тағы ла ҡатмарлы һәм мәшәҡәтле эш булып сыҡты. Колхоз планы буйынса улар Күмертауҙағы «Башкируголь» ОРС-ына 230 тонна кәбеҫтә тапшырырға тейеш. Планда ҡаралғандың 70 процентын ҡабул иткәс, ОРС работниктары кооператив кәбеҫтәһенән баш тарталар. Сәбәбе: Украинанан күп кәбеҫтә килтерелгән.

Етештерелгән продукцияны ҡайҙа ҡуйырға? Кооператорҙар юғалып ҡалмай. Беҙҙең йәмғиәттәге бик йәмһеҙ күренеш — минеке түгел... тигән ҡараш булманы уларҙа. Шуныһы көн кеүек асыҡ: кәбеҫтәне һатып бөтмәһәләр, ҡулдарына эләккән аҡсаны юғалтасаҡтар. Ваҡытында хәстәрлеген күргәс, әҙер продукцияға эйә табыла. Ишембай ҡалаһы сауҙа ойошмаһынан Ҡотлоюлға күп тонналы машиналар килә. Ә нисек тиҙерәк тейәп ебәрергә? Еңел мәсьәлә түгел был. Уны кооператорҙарҙың оҫтарлоғо, эшлеклелеге хәл итә. Улар утилгә ташланған металл узелдар, деталдәрҙән йыйып бына тигән транспортер әҙерләйҙәр. Механизация тейәү эшен ныҡ тиҙләтә, ҙур машиналарҙы 15—20 минутта тейәп ебәрәләр.

Яҡшы хәбәр тиҙ һәм алыҫҡа тарала, тиҙәр бит. Ҡотлоюл кооперативының кәбеҫтә уңышы тураһында хәбәр Ишембайға „Йомағужала урынлашҡан «Иштуғанстрой» тресы ОРС-ына ла барып етә. Уларҙан да кәбеҫтә алырға күп машиналар килә, тиҫтәләгән тонна продукция алып китәләр. Яҡшы кәбеҫтәне Ырымбур өлкәһе совхоздарынан да килеп алалар.

— Ул көндәрҙә эш бик күп булды, —ти кооператор Миҙхәт Ибраһимов. — Көнөтөнө эшләнек, кәбеҫтәне ҡырҡыу бик ауыр эш. Машиналар килеүенә өйөмдәр әҙер булды, уларға тотҡарлыҡһыҙ тейәп ебәрергә тырыштыҡ. Шулай ҙа беҙҙе тейәгес транспортер ҡотҡарҙы. Уны әҙерләмәһәк, кәбеҫтәне ебәреп бөтөү туҡталып ҡалыр ине. «Башкируголь» ОРС-ынан башҡа ойошмаларға кәбеҫтәнең килограмын 20 тиндән һаттыҡ, улар беҙгә аҡсаны банк аша түләне.

Шулай өлгөрлөк менән эшләү һөҙөмтәһендә кооператорҙар 300 тоннаға яҡын продукция реализациялай. Һуңғы һөҙөмтә — 38 мең һум аҡса эшләйҙәр. Һәр гектар ер уларға 2-шәр мең һумдан ашыу килем килтерә. Был килемдән кооператив яҙ алынған 6 мең һум кредитты ҡайтарырға, колхозға ер (һәр гектарға 50-шәр һум), техника һәм яғыулыҡ өсөн түләргә тейеш. Башҡа тотоноуҙарҙы ҡаплағас, ҡалған килем кооператорҙарға ҡала.

Кооператив коллективы алдағы йыл уңышы тураһында хәстәрлек менән йәшәй. Үҙҙәренең аҡсаһына Киров исемендәге колхоздан 1800 һумға теплица һатып алды. Уны Ҡотлоюлға килтереп ултырттылар ҙа инде. Унда иртә йәшелсә, рассада үҫтерерләсәк.

— Беренсенән, —ти кооперативтың бухгалтеры Азат Яманһаров, — колхоз бер йылда ла планын үтәй алмай ине. Ә быйыл кәбеҫтә һатыу планын арттырып тултырҙы. Икенсенән, колхозды йәшелсә үҫтереүҙән килгән зыяндан ҡотҡарҙы, өсөнсөнән, йәшелсә үҫтереүҙән бушаған егерменән артыҡ ҡатын-ҡыҙ һәм ирҙәр башҡа эштәргә күсерелде.

— Дүртенсенән, — тип һүҙгә ҡушыла Мөхәррәм Ибраһимов. — Беҙ үҙ көсөбеҙ менән күп эш башҡарыуға, кооперативтың уңышҡа ирешәсәгенә ныҡлы ышандыҡ, алдағы йылда нисек яҡшыраҡ һөҙөмтәгә өлгәшергә һығымталар яһаныҡ. Әммә колхоз договорҙа ҡаралған шарттарҙы үтәп еткермәне. Уларҙы ентекләп әйтеп тормайыҡ, алдағы йылда колхоз идараһы беҙгә ярҙамын яҡшыртыр тип ышанабыҙ, сөнки беҙҙең коллектив дөйөм хужалыҡ экономияһын күтәреү өсөн көрәшә.

Уңыш юлдаш булһын һеҙгә, Ҡотлоюл уңғандары.

М. СОЛТАНОВ.
СССР Журналистар союзы ағзаһы.
Күмертау.

Мәҡәләгә гонорарҙы автор «Урал» башҡорт халыҡ үҙәге фондына күсерҙе.

Иглин үлсәү заводында комсомолец Таһир Әбделкәримов ете йыл инде слесарь-йыйыусы булып эшләй. Ярты йыл элек ул 4-се участкаға күскән. Яңы һөнәрҙе икеөс аҙнала өйрәнеп, үҙаллы эшләй башлаған. Бында уны алтын ҡуллы оҫта тип йөрәтәләр, сөнки ҡулынан килмәгән эш юҡ. Ышаныслы кеше. Һәр саҡ ярҙамға килергә әҙер торғаны өсөн цех комсомол ойошмаһы уны комсорг урынбаҫары итеп һайлап ҡуйған. Йәмәғәт эштәрендә актив ҡатнаша, йәштәр тормошо менән ҡайнап йәшәй.

Ю. КӘРИМОВ фотоһы.

• Белгес кәңәше

РСФСР-ҙың Европа территорияһын беҙ йыш ҡына Үҙәк Ҡара тупраҡлы зонаға һәм Ҡара тупраҡлы булмаған зонаға бүләбеҙ. Ҡара тупраҡлы зонала уңдырышлы гумус ҡатламы уртаса 50—60 сантиметрға етә, матдәләргә бай гумус тупрағы 7—9 процент тәшкил итә. Ә бына Ҡара тупраҡлы булмаған зонала аҡһыл-һоро, көл төҫөндәге һәм һоро урман тупраҡтары ғына, уларҙа гумус ҡатламы 25 30 см, ә туҡлыҡлы гумус 3.5 процент тәшкил итә.

Һуңғы йылдарҙа Ҡара тупраҡлы булмаған зонала ауыл хужалығын күтәреү өсөн дәүләт байтаҡ программа ҡабул итте. Капитал һалыуҙар артты, техника күберәк бирелә башланы. Колхоздарға һәм совхоздарға дотация бүленә. Продукцияны хөкүмәт Ҡара тупраҡлы зона хаҡынан ҡиммәтерәккә һатып ала, дәүләт заданиеһы ла (дәүләт заказы) кәмерәк. Беҙҙең Башҡортостан был зонаға инмәй. Шул уҡ ваҡытта күрше Пермь өлкәһе керә. Ә бына Татарстандың бер нисә районы Ҡара тупраҡлы булмаған зонаға, ә ҡалғандары Ҡара тупраҡлы зонаға индерелгән.

ТӨНЬЯҠ РАЙОНДАРҘЫҢ ТУПРАҒЫ

Республикабыҙ, урман-дала зонаһы иҫәпләнеп, Ҡара тупраҡлы ерҙәргә ҡараһа ла, бик ҙур майҙаны гумусҡа ярлы урман тупрағынан тора. Гумус ауыл хужалығы биләмәләренең 27,1 процентында ғына (мәғлүмәттәр «Волгогипрозем» институтының Башҡортостан филиалынан алынды), ә көлһыу, башҡаса әйткәндә, кәҫле-көлһыу тупраҡ — 15,7 мең гектар. Шуның 11 мең гектары — һөрөнтө ерҙәр.

КӘҪЛЕ-КӨЛҺЫУ ТУПРАҠ республиканың төньяҡ райондарында ҙур булмаған майҙандарҙа, элек ылыҫ һәм ылыҫлы япраҡлы урман булған ерҙәрҙә барлыҡҡа килгән. Ул ҡатлам көл төҫөндә булыуы менән айырылып тора. Ә урманда ағастарҙы киҫкәс, үлән гумус ҡатламы, кәҫ барлыҡҡа килтерә, сөнки көлһыу тупраҡ ағас үҫентеләре тәбәндә була. Йылдар үтеү менән гумус ҡалынайып 20 сантиметрға етә.

Кәҫле-көлһыу тупраҡ әсе булыуы менән айырыла. Ә әселекте белдергән билдә — шул ерҙәрҙә ваҡ шыршылар үҫеүендә. Эзбизләһәң, бындай тупраҡта әселек бөтә һәм теләһә ниндәй культура үҫә ала. Кәҫле-көлһыу тупраҡ гумусҡа ярлы була, ни бары 1,5—2 процент ҡына тәшкил итә. Ә 70-се йылдарҙағы тәрән һөрөү кампанияһы ваҡытында тупраҡ 28-30 сантиметрға аҡтарылып, көлһыу ҡатлам ҡыҙыл балсыҡ менән буталды.

Уңдырышлы ҡатламды арттырыу өсөн тиҙәк, торф һәм башҡа органик ашлама индерергә кәрәк. Әсе тупраҡҡа фосфор бик файҙалы. Минераль ашлама индерелгән йылды мул уңыш алып була. Мәҫәлән, Белоруссияла тупраҡты яҡшылап эшкәрткән хужалыҡтар гектарынан 30-40 центнер иген күләмендә тотороҡло уңыш үҫтерә. Польшала һәм ГДР-ҙа кәҫле-көлһыу тупраҡта 50-шәр центнер иген йыйып алалар, бигерәк тә арыш, арпа һәйбәт үҫә.

Элек Башҡортостанда ла бындай ерҙәргә етен, киндер генә сәскәндәр. Был культура әсе тупраҡ ярата. Колхозсылар һуңғы йылдарҙа ла һәм унан һуң да киндер менән көн күргән. Төньяҡ райондарҙа ҡайһы бер ихаталарҙа етен орлоғо төйә торған киләләр, һабағын тылҡый торған ҡоролмалар әле лә һаҡланған. Оло кешеләр һүҙҙәренә ҡарағанда, киндер аш бик туҡлыҡлы, тәмле ризыҡ булған.

БЫЛАРҘАН ТЫШ, Башҡортостанда һоро урман тупрағы бар. Ул республиканың төньяҡ районында, бигерәк тә киң япраҡлы ағас урмандары тирәһендә ҙур майҙанда таралған. Ҡатнаш урман янында ла бар. Ағиҙел ярында ундай ерҙәр элек урман үҫкән урындарҙа, шулай уҡ далала һирәк осрай торған урман ағастары аҫтында барлыҡҡа килгән. Уның майҙаны 1 миллион 962 мең гектар, шул иҫәптән һөрөнтө ерҙәр — 1540 мең гектар. Ауыл хужалығы биләмәләренең барлыҡ майҙаны 7 миллион 282,5 мең гектар.

Һоро урман тупрағы, уңдырышлы гумус ҡатламының сифатына ҡарап, 3 төргә бүленә.

АҠҺЫЛ-ҺОРО ТУПРАҠта уңдырышлы гумус ҡатламы аҡһыл-һоро төҫтә, 15 20 см. ҡалынлыҡта була, саф гумусы 2,5—3 процент тәшкил итә. Беҙҙә был тупраҡ та тәрән һөрөлөп, гумус ҡатламы аҫта ҡалды, ә ерҙе ҡаҫтаҡтаһыҙ һөрөргә кирәк. Эзбизды ҡурҡмайынса керетергә мөмкин, гектарына 3—4 тоннаға тиклем һипһәң дә зыян булмай.

ҺОРО ТУПРАҠ — һоро төҫтә. Уны һөргәндән һуң, көл һымаҡ аҡһыл матдә айырылып тора. Уңдырышлы ҡатлам 25—30 см, гумус —4,6 процент тәшкил итә. Бында ер әсе, гектарына 2—3 тонна эзбиз индереү талап ителә. Тәрән һөрөргә ярамай. Ә беҙ ҡарап тормай һөрҙөк һәм ҡыҙыл балсыҡты аҡтарып сығарҙыҡ.

ҠАРА-ҺОРО ТУПРАҠ республикала киң таралған, ул бөтә райондарҙа ла бар, тоноҡ ҡара төҫө менән айырылып тора, уңдырышлылығы буйынса ҡара тупраҡҡа яҡын. Гумус 5—9 процентҡа етә, ҡалынлығы уртаса 35 см. була. Ныҡ әсе түгел, шунлыҡтан эзбизлау менән мауыҡырға ярамай. Әселек картограммаһын өйрәнеп, бик аҙ дозала, гектарына 0,5—1,5 тонна ғына индерергә кәрәк. Унда ла бөтә майҙанға түгел, ә әсе ерҙәренә генә. 20—22 сантиметрҙан тәрән һөрөү тыйылырға тейеш, юғиһә уңдырышһыҙ һары балсыҡ өҫкә сыға.

ШУЛАЙ ИТЕП, республикабыҙҙа Ҡара тупраҡлы зонаға ҡарамаған ерҙәр майҙаны ауыл хужалығы файҙалана торған территорияның өстән бер өлөшөнә яҡын. Уңыш түбән, гектарынан уртаса 11 центнер ғына иген алабыҙ. Әммә тейешле технология ҡулланғанда уны ҡырҡа күтәрергә була. Бының өсөн, республиканың төньяҡ райондарын Ҡара тупраҡлы булмаған зонаға керетергә кәрәк. Шул саҡта дәүләт дотацияһы Пермь өлкәһендәге кеүек булыр ине. Ауыл хужалығы продукцияһын дәүләт юғарыраҡ хаҡҡа һатып алырға тейеш, ә минераль ашламаны хужалыҡтарға кәрәгенсә арзанраҡ хаҡҡа бирһендәр. Ашламаларҙан файҙа ҙур буласаҡ.

Х. САФИУЛЛИН,
биолог.
Өфө.

Башҡорт думбыраһы

йәки музыка ҡоралының яҙмышы тураһында

Былтыр декабрь айында «Урал» башҡорт халыҡ үҙәгенең I йыйыны булып, унда халҡыбыҙҙың өлгәшкән уңыштары менән бергә, матди һәм рухи артталыҡҡа килтергән байтаҡ сәбәптәр билдәләп үтелде һәм бындай бөлгөнлөктән сығыу юлдары ла тәҡдим ителде. Сығыштар араһында ла, йыйын барышында бирелгән һорауҙарҙа ла, башҡорт музыка ҡоралдарын ни өсөн һаман аяҡҡа баҫтырмайҙар, тигән кеүек һорауҙар ҙа күп булды. Һорауҙарҙың күбеһенә йыйынға килгән етәкселәр яуап бирҙе, яуапһыҙ ҡалған һорауҙар ҙа етерлек. Данлыҡлы оҫтабыҙ Вәкил Шөғәйепов ҡурайының ни тиклем борма-борма һикәлтәле-кәртәле юлдар үтеүен, ҡурайҙы күпләп етештереү өсөн бүлмә юллауҙа иң тәүге юлдарҙы асыуҙа ҡатнашыусыларҙың береһе булараҡ, беләм. Башҡорт думбыраһы яңау ҙа күҙгә күренмәгән ҡаршылыҡтар арҡаһында, танылыу тапҡанлан һуң да, бойомға ашмай ятамы икән әллә? Рәсмиҙәрҙең иң рәсми урынында, БАССР Министрҙар Советы эргәһендә Башҡорт халыҡ музыка ҡоралдарын өйрәнеү, етештереү һәм пропагандалау буйынса төҙөлгән республика комиссияһында ҡаралғайны бит һуң думбыраны күпләп етештерә башлау мәсьәләһе. Республикабыҙҙың иң абруйлы кешеләренән профессор, композитор, СССР-ҙың халыҡ артисы Заһир Исмәғилев, филология фәндәре докторы, профессор Ғайса Хөсәйенов, Өфө дәүләт сәнғәт институты ректоры, профессор Зиннур Нурғәлин һәм башҡа бик күп ғалимдар, сәнғәт институтының халыҡ инструменттары кафедраһы уҡытыусылары тотош ҡатнашҡайны ла бит. Һа! Ҡарар ҡарар өсөн генә ҡабул ителә лә, һыуға һәнәк менән яҙып ҡуйғандай, тулҡын аҫтында ҡаламы икән әллә? Хәҙер өсөнсө йыл китте бит инде ул ултырыш үткәнгә.

Газета уҡыусы иптәштәрҙе лә ултырышта һөйләнгән, әйтелгән фекерҙәр менән таныштырып үтәйем.

Ултырыш башланғас, Әбҙәликов менән Ғәниев башҡорт думбыраһында уйнап ишеттерҙе. Шунан БАССР-ҙың атҡаҙанған сәнғәт эшмәкәре З. Х. Ғөбәйҙуллина:

— Былтыр ошо уҡ комиссия Вәкил Шөғәйепов эшләгән думбыраны тыңлап ҡарағандан һуң, байтаҡ ҡына иҫкәрмәләр әйтте, музыка инструментын камиллаштырыу йәһәтенән тәҡдимдәр индерҙе. Быйыл оҫта уның камиллаштырылған вариантын тәҡдим итә. Әгәр комиссия яраҡлы тип тапһа, БАССР Музыка йәмғиәте уны күпләп етештереү эшен башлаясаҡ, — тине.

Вәкил Шөғәйепов думбыра ҡылдары әлегә балалайканыҡы икәнлеген һәм күпләп етештерә башланһа, уны ат ҡылы менән алмаштырасағын, ул саҡта инде яңғыраштың хас башҡортса буласағын алдан әйтеп үтте. Институт уҡытыусыһы А. К. Савицкий башҡорттарҙа думбыра булғанмы һуң? — тип ҡыҙыҡһынғас, профессор Ғайса Хөсәйенов сәсәндәрҙең борон думбыра сиртеп уйнауын, эпос әйтеүселәрҙең думбыраға ҡушылып көйләүен бәйән итә, композитор Айрат Ҡобағошов та 40—50-се йылдарҙа Баймаҡ, Әбйәлил, Ырымбур яҡтарында халыҡта думбыра һаҡланыуы хаҡында һөйләй. Башҡорт ғалимы Ялсығол Тажетдин башҡорт думбыраһының төҙөлөшө тураһында яҙып ҡалдырған. Яҙма Ҡазан архивында һаҡлана.

— Рус думбыраһын да юғалған ерҙән Андреев аяҡҡа баҫтырҙы бит, — ти Ғайса Хөсәйенов.

Сәнғәт институты уҡытыусыһы Б. П. Тевс думбыраның халыҡ араһында таралып китеү-китмәүенә, халыҡтың уны ҡабул итеү-итмәүенә шикләнә. Заһир Исмәғилев: «Ҡаҙаҡтарҙа хәҙерге Ҡорманғазы халыҡ инструменттары оркестрына нигеҙ һалынғанда, бер генә думбыра ине. Әлбиттә, думбыраны матур уйнағанда, халыҡ үҙ музыка инструментын ҡабул итер, насар уйнаһаң, ҡабул итмәҫ. Ана Фәрит Камаев ҡайҙалыр тағы бер башҡорт музыка ҡоралы күреп ҡайтҡан. Бәлки, думбыра ла һаҡланалыр? Ҡобайыр — башҡорт халҡында иң киң таралған ижад. Уны ҡурайға ҡушылып әйтеп булмай, шулай булғас, Ғайса Хөсәйенов хаҡлылыр, тип уйлайым, булған беҙҙең халыҡта думбыра. Тевс иптәш, бында халыҡ ҡабул итәме-юҡмы, думбыра кәрәкме-кәрәкмәйме, тип фәлсәфә һатырға түгел, ә етештерә башларға һәм уҡыу программаһына индереү мәсьәләһен ҡарарға кәрәк. Партиябыҙ үҙе юғалған байлыҡты кире аяҡҡа баҫтырыуҙы талап итә.

Заманында Башҡортостанда тиҫтәләгән генә ҡурайсы ҡалғайны. Ғата Сөләймәнов тырышлығы менән ана ниндәй киң ҡолас алды был хәрәкәт. Мин ышанам, думбыраны ла шундай бәхетле яҙмыш көтә».

— Думбыраны пропагандалау эшен беҙ үҙ өҫтөбеҙгә алабыҙ, — ти думбырасы булып танылған Риф Сөләймәнов. Ғалим Фәрит Камаев Алтайҙа башҡорт думбыраһына оҡшаған думбыра булыуын, ғөмүмән, ундағы халыҡ менән башҡорт халҡы музыка ҡоралдарының ныҡ оҡшаш булыуын әйтә, Вәкил Шөғәйеповты унда ебәрергә лә тәҡдим була, думбыра тауышын ҡабат-ҡабат тыңлап та ҡарайҙар был ултырышта, шунан РСФСР-ҙың атҡаҙанған артисы Р. Ю. Шәйхетдинов думбыра өсөн репертуар юҡлығын да әйтеп һала (башта репертуар, шунан һуң инструмент булдырыла икән дә!) Заһир Исмәғилев, думбыра өсөн әҫәр яҙасаҡмын, тип был мәсьәләне лә хәл итә. Вәкил Шөғәйепов инструментының етешһеҙ яғы табылманы. Тик халыҡ инструменттарының үҙенсәлеген аңламаған ҡайһы бер иптәштәр генә, тауышы сағыу түгел, тип ҡарағас, Фәрит Камаев Алтай халыҡтарындағы думбыра яңғырашының да ошолай уҡ булыуын, был башҡорт халҡы инструменттарына хас үҙенсәлек икәнлеген аңлатып бирә. Башҡорт дәүләт сәнғәт институтында эшләп тә халыҡҡа хас үҙенсәлектәрҙе белмәгән, һаман төшөнә алмаған уҡытыусылар булыуы ғәжәп!

Ижади комиссия күпселек тауыш менән думбыраны ҡабул итә һәм күпләп етештерә башларға тәҡдим итә.

Әммә, әммә...

Оҫтаның мастерскойына юл алдым. Әллә нисә төрлө думбыра ята бында, Һәр береһе үҙенсәлекле яңғырашлы. Оҫта илһамланып уйнап ишеттерә.

— Ярты һаулығымды ҡурай өсөн көрәш алғайны. Быныһына көс-ҡеүәтем етмәҫ, ахыры, — тине. Һорашып торманым. Тик ҡурай эшләү өсөн рөхсәт, бүлмә алыу юлын күҙ алдына килтереп, тәндәрем сымбырҙап ҡуйҙы. Үҙгәртеп ҡороу елдәре килеп етмәнеме ни беҙгә һаман? Башҡорт думбыраһы үҙенә юлды ҡурайға ҡарағанда еңелерәк ярмаҫмы? Ни эшләп беҙҙең республикала һәр яңы, һәр яҡшы, аҙаҡ «мин эшләттем дә мин булдырҙым» тип күкрәк һуғып йөрөрлөк эштәр башта шул уҡ «маһир ирҙәр» арҡаһында тотҡарланып ята һуң? Аңлашылмай. Диалектика закондарына ҡабат күҙ йүгертеп сыҡһам да аңламайым, сөнки ундағы закондар буйынса хәҡиҡәт, хаҡлыҡ үҙенә үҙе юл ярырға тейеш, ә беҙҙең республикала ысынбарлыҡ нәҡ киреһен күрһәтә.

Мәрйәм БУРАҠАЕВА.

ҺҮРӘТТӘ: Өфө гарнизоны һалдаттары «Еңеү паркында».

Р. МӨХӘМӘТОВ фотоһы.

АСАР АҠ ҠОБАЙЫРЫ

Башҡорт шәжәрәләре ҡанунында үрелгән был ҡобайырҙы яҙыусының «Ерем, кешеләрем» тигән әлегәсә бер ҡайҙа ла баҫылмаған киң күләмле романынан өҙөп алдыҡ. Математика формулалары тәбиғәтенә хас тығыҙлыҡ менән аҙ күләмгә һыйҙырылған ғәжәти түгел тарихи мәғлүмәттәр уҡыусыға еңел генә бирелмәүе лә ихтимал, сөнки тәрән тарихыбыҙ уны өйрәнеүсеһенән ифрат түҙемлек, ныҡышмалылыҡ, төрлө парадокстарға ла әҙер булыуҙы талап итә. Халыҡтың алыҫ үткәне менән етди ҡыҙыҡһыныусы, уның юйылған эҙҙәрен юллап табырға тырышыусы йәш күңелгә иркен белем донъяһына артабанғы үҙаллы сәйәхәтендә тәүге юҫыҡ булыр был юлдар, бәлки. Шул уҡ ваҡытта ул автор концепцияһының етешһеҙлектәрен дә күреп алыр, был иһә уны баш ватып уйланырға, сәмләнергә, автор менән ихлас бәхәсләшергә һәм бойондороҡһоҙ эҙләнергә лә этәрер.

Алыҫ бабаларыбыҙ ҙа был донъяның килеп сығышы, тереклектең башланышы менән ныҡ ҡыҙыҡһынған, шуның төҙөк моделен дә төҙөгән үҙ аңында. Шундайҙың иң тәүгеһе — тереклектең баш эйәһе итеп Әсә (Ас) балыҡ менән Ир (Ар) балыҡ һәм улар мөхиттә һыу (Аҡ) һаналған миф булыр, был иһә иҫке картографик нигеҙен дә тәшкил итә — ике балыҡ күтәреп тотоп тора донъяны ул боронғо карталарҙа.

Шулай итеп, бөтәбеҙҙең башланғысы (эйәһе) Ас Ар Аҡ (Асар Аҡ). Ошо Асар Аҡ эйәбеҙ ауыҙынан бәйән ҡылына ҡобайыр. Уны төп текст аҫтындағы иҫкәртмәләре менән бергә бәйләп уҡыу мотлаҡ.

Игелек ҡыл да һыуға һал — балыҡ белер, балыҡ белмәһә — халыҡ белер.

Башҡорт халыҡ мәҡәле.

Төпһөҙкүлдең йөҙө бөгөн болоҡһоу, яманһыу. Һыуы уның ҡарағурғаш һымаҡ тонйорап ята. Бер тамсы ла һелкенмәй, бер тулҡын да талпынмай. Күктең ҡобараһы менән һыуҙың ҡобараһы бергә тоташҡан. Ҡобараһы осҡан сөңгөл төпһөҙлөгә менән баҡҡан донъяға. Төпһөҙкүлдең шығырым керпектәре, ҡара талдар, төн ҡараһын ҡымшатмаҫҡа күл тирәһен божоралап һынсыл һағайып ҡалған. Көйәҫле ел, елкенмә, ҡусҡыл ҡыяҡ, һелкенмә, төнкүбәләк, елпенмә! Был мәҙәттә ғәләм тынырға тейеш, Уны тыңларға тейеш! Ерҙең йөрәкһеүе менән йөрәкһенеп уйлана Ул, асыуҙары әскәйенә һыймайынса тулғана Ул, әҙәмдәрҙең әһелһеҙлегенән асырғанып һыҙлана Ул, ҡуҙлана Ул, һүҙләнә Ул, һөйләнә Ул, Асар Аҡ. Төпһөҙкүлдең асырғанған әсәкәйе Асар Аҡ, һыу эйәһе Асар Аҡ. Асар Аҡай тип әйтһәгеҙ, булалыр (А) Сараҡай — Сарағай йә Сурағай... Төпһөҙкүлдең төбәндәлер төп әсәбеҙ Сурағай. Асар Аҡ тип, Аса-Раҡ тип, Әсә-Рух тип атауҙар ҙа булғылай — «рух» һүҙебеҙ, «раҡ» һүҙебеҙ ана шунан килгеләй... Асар Аҡтан тыуғандарҙы Асар-Аҡ-ан тип йөрөткән бабалар (сығанаҡ килеш ялғауылыр «-ан» тип хәҙер табалар). Асар Аҡтан таралыусы Асар Аҡан тоҡомдары Асар-Аған аталмыш. Асар-Аған тора-бара Асарған тип әйтелмеш, Үҫәргән тип йөрөтөлмөш, ҡыҫҡартылып Сар тигән дә бар имеш. Шул Асарған (Үҫәргән) батшалары Саргон тиеп данланмыш, данланмыш та, ҡанланмыш. Сар тигәне булған «царь»; Асар Аҡ та — «царь Аҡ»тыр, «аҡ батша» һәм «белый царь» — икеһе лә бер йәнтер... Ғәскәр башлығы Сар-«царь», тимәк, уға буйһоноусы бүре-ҡасҡар[35] ҙа (хәҙергесә — ғәскәр ҙә) бабаларҙың һөнәре. «Бүре-ҡасҡар» тигәне — «бүрек-аскар» рәүешле лә әйтелгән, шунан «бүлек-аскар» тип, йәнә «волк-аскар» тип, «волк» иһә «полк» тип тә үҙгәрмеш, хәҙер ҙә шул әйтелмеш...

Сар-ҡасҡар тип аталған ил ғәскәренең башлығы, Сар тарихын яҙғандар, ти, үҙәге аҡ ҡый-сүптән[36] ҡыйып алған аҡ тапҡа — боронғоса ҡый-тапҡа, хәҙергесә китапҡа. Сар тарихы яҙылмыш шул китап, ти, аталғандыр боронғоса сар-ҡыйтап. Заманалар уҙған һуң, сабаталар туҙған һуң, аҫта ҡалған сар-батша, өҫкө ҡалҡҡан яҙыусы — сар-китапты төҙөүсе. Сәркитап тип аталып, сәркәтип тип маҡталып, гәрәпкә лә киткән, ти, беҙҙең китап яҙыусы. Гәрәп һүҙе тигәнең — үҙебеҙҙең һүҙ, ҡусты...

Әйт, тиһәгеҙ, әйтәйем, әйт, тиһәгеҙ, әйтәйем, илгә мәғлүм итәйем!

Асар Аҡан һүҙенән «асыра конь» табылыр, ә «конь» — урыҫ атылыр. Асар Аҡан-ат тиһәк, «ат»ты «атай» тип белһәк, ошо мәғлүм булалыр: Асар Аҡтан яралған беҙҙең тәүге аталыр — атайыбыҙ «конь-ат»тыр, «конь-ат» — иргә «ҡанат»тыр. Икенселәй аңлаһаҡ, шул уҡ «конь-ат» — «Көн-ут»тыр; ерҙән бауға бауланып, көн дә күкте әйләнеп, бауға [illegible]гән[37] Ҡояштыр. Ҡояштыр ҙа көн-уттыр, «конь-ат»тыр ҙа «ҡанат»тыр. Үҫәргәндәр тоҡомо ҡанатланған-атланған, Асылыкүлдән таралған арыу белмәҫ конь-аттыр, ҡанаттыр...

«Үҫәргәнат» тигәндән, «Осор-Ҡанат» тигәндән «анат» тигән өлөшсә бирәлер тос төшөнсә — «ир-ат» менән барыбер: боронғораҡ әйтелгән «арат» кеүек «анат» ул үҫәргәндең үҙе ул. Шул «анат»ты «ант» тиеп, ә урыҫса «анты»[38] тип йөрөтәләр китапта — хәҙер китап һүҙе ул, Үҫәргәндең үҙе ул...

Әйт, тиһәгеҙ, әйтәйем, әйт, тиһәгеҙ, әйтәйем, илгә мәғлүм итәйем!

Асылыкүлдән ҡарпығыан аҫыл конь-ат ярһыған — көн яғына тартылған. Аҫыл ир-ат (анат) Үҫәргән йүгән-эйәр кейҙергән — атланған шәп конь-атҡа — ир ырыҫы ҡанатҡа, юлланған тап көньяҡҡа. «Үҫәргән»дән — «Үһәргән», «Үһәргән»дән — «Үгүргән» тип әйтелеш үҙгәргән. Шул «Үгүргән» — «Гүргән» тип, ә торараҡ «Гиркан»[39] тип олло диңгеҙ аталған — Үҫәргәндәр диңгеҙе. Һәм көнсығыш яғында ҡалҡҡан Гүргән ҡалаһы. Үҫәрһе — Үҫәргәндәр ҡалаһы. Үҫәргән-дарья — Сурхандарья. Үҫәр-дарья — Сәрдарья (Сыр-дарья), Үҫәргәндәр йылғаһы...

Әйт, тиһәгеҙ, әйтәйем, әйт, тиһәгеҙ, әйтәйем, илгә мәғлүм итәйем!

Шул Үҫәргән-Асарған һаман үҫкән-артынған, көн яғына тартылған — Ил-Бүреәсә[40] тауына артылған ул, артылған. Илак-дәүләт ҡорорға, иләүләнеп торорға Ил-Бүреәсә тау буйында бер тоҡомон ҡалдырған — Бүреәсән[41] тоҡомон ҡалдырған. Бүреәсән дәүләте — «Бүреәсә иле» (Берсилия) тип аталған, маҡталған... Үҫәргән һаман артынған, артабан көнгә тартылған, Ҡаңғырат[42] тауын артылған. Шунда дәүләт ҡорорға, иләүләнеп торорға Ҡаңғы ир-ат[43] ҡалдырған. Көнгә һаман тартылған, тартылған да тартылған. Үҫәргән, ти, бер заман үҙе һымаҡ Уралдан ҡубынған бер ғәләмгә — Асаба-ар — Субар тип. Субар тип тә Сумар тип, Сумар тип тә Шумер тип аталған ҡан-ҡәрҙәштәр иленә, ти, Түгер[44] һәм Ифрат[45] йылғаларының аралында тарыған. Был саҡ Ғайса пәйғәмбәр тыуасаҡ бер йылғаса, әйтһәк әгәр китапса, беҙҙең эраға тиклем 24-се, ти, дәүбыуат заманаһы, ти, булған. Сумар-Шумер батшаһы Олоуғылсаҡкеше[46], үҙ тәхетен ҡурсалап, бирешмәҫкә тырышҡан. Ә Үҫәргән-Асарған, ҡыҫҡа әйтһәк, ти, Сарған, ә китапса шул Саргон-батша килгән ҡомарып, алтын тәхет алам, тип. Шумер-батша һуғышҡан, йә Саргонды салам, тип, йә башымды һалам, тип. Әммә эйә Асар Аҡ, Үҫәргәндә ҡурсалап, Шумерҙы, ти, ҡыйратҡан. Сәр-ғәскәре Саргондың бөтә Кесе Азия ҡалаларын теҙләткән — Түгер, Ифрат буйҙарын Сәр[47] иленә әй иткән. Шунан һуң, ти, был ерҙе келлә күрше дәүләттәр Сәр Өйө[48] тип йөрөткән...

Әйт, тиһәгеҙ, әйтәйем, әйт, тиһәгеҙ, әйтәйем, илгә мәғлүм итәйем!

Ил-Бүреәсә тау буйлап Бүреәсән-Берйән киткән, ти, ҡарап ҡояш байышҡа. Барып сыҡҡан юлайҡан ер ҡапҡаһы Ҡапҡастан[49]. Көләс-диңгеҙ[50] яғынан Бүреәсә[51] һыуы буйына. Көтөп шунда көтөүҙәр, игеп йәнә игендәр, һалып сала[52]-ҡалалар, үрсегән дә бүленгән Бүреәсән ике тармаҡҡа: береһе киткән көнбайышҡа, икенсеһе көнсығыш — икеһе ике яҡҡа. Көнбайышҡа киткәне Балтик диңгеҙ буйында, Төньяҡ диңгеҙ ярында мәңгелеккә төпләнгән. Кәмә-елкән торғоҙоп, диңгеҙ кисеп, ил гиҙеп, ерҙәр асып данланған. Бүреәсәндән — Бүржән тип, бер ғәләме Бүрес тип, аҙаҡ килеп Прус тип ул хәлайыҡ аталған, яугир зат тип маҡталған. Әсә телен онотоп, күрше телен үҙ итеп, немец, француз, швед тип аҙаҡ үҙен атаған[53]. Әммә әсә теленән — Бүреәсән-Берҗән һүҙенән — тик һигеҙ йөҙ һүҙ генә был көнгәсә һаҡланған («Прус теле» китабына тупланған)...

Бүреәсән һыңар тармағы — көнсығышҡа тартҡаны — ҡайтып еткән боронғо атайсалы Уралға: ураланған урманға, Ағиҙелгә, тауҙарға. Исеме лә ҡалған, ти, «Бүреәсән»дән «Берйән»гә...

Бүреәсән-Берйәндән тағы төрлө заманда, икеһе ике Балҡанда ике Болғар[54] ҙа ҡоролған, дәүләт булып данланған[55]...

Әйт, тиһәгеҙ, әйтәйем, әйт, тиһәгеҙ, әйтәйем, илгә мәғлүм итәйем!

Үҫәргәндең ҡалдырған — Ҡаңғырат тауҙа ҡаңғыған — Ҡаңғы ир-ат тармағы, тау буйына таралып, көнсығышҡа ҡараны. Ҡарай-ҡарай үтте ул, үҙенеке итте ул Инд йылғаһын киҫкәнсе, Ҡомалаҡ[56] тауға еткәсе йәннәттәй кор яраны. Океанға түгелгән кер ылғаны арбаны; еркетеп, шул үҙ исемен кер һыуҙы мәңгегә Ҡаңғы[57] тиеп атаны, шунда булды ватаны. Күршеләргә ҡыҙ биреп, үҙенә лә ҡыҙ алып, теле бергә буталды. Ул тел аҙаҡ китапса «санскрит» тип аталды, үле телгә һаналды. Әммә, уҡып ҡараһаң, «санскрит»та күрәһең бик күп беҙҙең ғәзиз һүҙ — башҡорт теле ятҡанды[58]...

Әйт, тиһәгеҙ, әйтәйем, әйт, тиһәгеҙ, әйтәйем, илгә мәғлүм итәйем!

Ҡаңғы ир-ат үлмәгән, теле уның бөтмәгән — меңмең йылдар буйына тупраҡ уны күммәгән, күммәгән. Арба егеп бер заман, ҡаңғырышып бик яман, Ҡаңғы ир-ат ҡалдығы ҡайтып еткән Уралға — тәүге төйәктораlға, мәңге тороп ҡалырға. Бөгөн дә ул көн итә, әсә телен үҙ итә, балаларын үҫтерә тәүбабалар төйәҙе Асылыкүл буйында, Ҡаңғы-Төркәй ерендә.

Әйт, тиһәгеҙ, әйтәйем, әйт, тиһәгеҙ, әйтәйем, *илгә мәғлүм итәйем!*

Асарғандан-Саргондан, аҙағыраҡ Сәр, Һундан күп тармаҡтар таралған, ҡәбиләләр яралған. Әммә ырыу йәҙрәһе һаман үҙен һаҡлаған — Үҫәргән тип аталған. Көньяҡ киткән юлынан ҡайтҡан кире төньяҡҡа — тәүтөйәге Уралға, мәңгелеккә торорға. Атайсал көньяғында — тас Үҫәргән юлында торалыр ул һаман да.

Әйттем һеҙгә бер юлды, тик бер юлды, бер юлды, ә ул юлдар дүртәүҙер: атайсалдың дүрт юлы дүрт тарафҡа илтәләр. Шул дүрт юлдың өс осо — өс ҡәбилә юлылыр. Ә дүртенсе тармағы, тармағының төн ослағы — мәңгелек туң төн яғы — Тәңренең ул юлылыр. Өс ҡәбилә — өс таған — Атан-Тәңре улылыр, улылыр ҙа ҡыҙылыр. Ә дүртенсе ҡәбилә — Асаба-Атан-Тәңре тотҡаһы — Асабалыр был ерҙә, бойороусы ул өсәүгә[59]: өс тағандың өҫтөндә ҡаҙан һымаҡ икән дә... Тимәк, бына ни ғиллә: дүрт юлда дүрт ҡәбилә — беренсеһе Асаба, ҡубынмай ул башҡаса — ҡала мәңге был ерҙә, хеҙмәтсе ул Тәңрегә. Икенсеһе — Абыз ул, көнсығышҡа уның юл. Өсөнсөһө — Үҫәргән, көньяҡҡа ул юл ярған. Дүртенсеһе Орос ул. Ырыҫ ул да Урыҫ ул, көнбайышҡа уның юл... Тағы шуны әйтәйем, дүрт тармаҡлы дүрт юлды тәҫмирләтеп бирәйем: балаҫтарға баҫылған, аҫаларға аҫылған, биҙәктәргә биҙәлгән сатраш-тәре булыр ул. Ә иң тулы һыҙаты — ата-баба ҡоҙрәте — Асаба-Әстән[60] булыр ул. Свастика[61] булыр ул! Свастика тимәктер — башҡорттоң дүрт юлы ул, донъяның дүрт ҡулы ул — ишараты шуның ул!

Дүрт ҡәбилә юлының тик береһен һөйләнем, ҡуҙаллатып көйләнем — ҡалған өсөнә теймәнем. Кәрәк булһа, бер заман уларын да һөйләрмен, көйләрмен...

Әйт, тиһәгеҙ, әйтәйем, әйт, тиһәгеҙ, әйтәйем, илгә мәғлүм итәйем!

Мин, Асар Аҡ, асыулы, йөрәккәйем ярһыулы — күлем шуға борсоулы, күгем шуға моңһоулы. Ни өсөн ул, тимәгеҙ — үҙегеҙҙән [illegible] болоҡһоуым сәбәбен. Һеҙ бит, һеҙ бит, әҙәмдәр, онотасағыҙ ҙа ғәләмдәр, тотоғоҙ тарихты, тарих ҡылын

Әманәт

АСАР АҠ ҠОБАЙЫРЫ

ынында үрнәлгән был ҡобайыр- рен» тигән әлегәсә бер ҡайҙа романынан эҙәп алдыҡ. Матема- на хас тығыҙлыҡ менән аҙ кү- түгел тарихи мәғлүмәттәр уҡыу- ихтимал, сөнки тәрән тарихы- рат түҙемлек, ныҡышмалылыҡ ер булыуҙы талап итә. Халыҡ- ҡыҙыҡһыныусы, уның юйылған ышыусы йәш күңелгә иркен бе- уралы сәйәхәтендә тәүге юҫыҡ ул уҡ ваҡытта ул автор концеп- күреп алыр, был иһә уны баш автор менән ихлас баһасла- нергә лә этәрер.

донъяның килеп сығышы, те- ныҡ ҡыҙыҡһынған, шуның тә- ында. Шундайҙың иң тәүгеһе әсә (Ас) балыҡ менән Ир (Ар) (Аҡ) һаналған миф булыр. Был дә тәшкил итә — ике балыҡ ул боронғо карталарҙа.

башланғысы (әйәһе) Ас Ар Аҡ беҙ ауыҙынан бәйән ҡылына дағы иҫкәртмәләре менән бергә

— сар-китапты төҙөүсе. Сәр-китап тип аталып, сәркәтип тип маҡталып, ғәрәпкә лә киткән, ти, беҙҙең китап яҙыусы. Ғәрәп һүҙе тигәнең — үҙебеҙҙең һүҙ, ҡусты...

Әйт, тиһәгеҙ, әйтәйем, әйт, тиһәгеҙ, әйтәйем, илгә мәғлүм итәйем!

ар Аҡан һүҙенән «аҫы[illegible]» табылыр, ә «конь» — урыҫ атылыр. Асар Аҡанат тиһәк, «ат»ты «атай» тип белһәк, ошо мәғлүм булалыр: Асар Аҡтан яралған беҙҙең тәүге аталыр — атаһыбыҙ «конь-ат»тыр, «конь-ат» — иргә «ҡанат»тыр. Икенселәй аңлаһаҡ, шул уҡ «конь-ат» — «Көн-ут»тыр; ерҙән бауға бауланып, көн дә күктә әйләнеп, бау[illegible] [illegible]ган[57] Ҡояштыр, Ҡояштыр ҙа көн-уттыр, «конь-ат»тыр ҙа «ҡанат»тыр. Үҫәргәндәр тоҡомо ҡанатланған-атланған, Асылыкүлдән таралған арыу белмәҫ конь-аттыр, ҡанаттыр...

«Үҫәргәнат» тигәндән, «Осор-Ҡанат» тигәндән «анат» тигән өлөшсә бирәләр тос төшөнсә — «ир-ат» менән барыбер: боронғораҡ әйтелгән «арат» кеүек «анат» ул Үҫәргәндең үҙе ул. Шул «анат»ты «ант» тиеп, ә урыҫса «анты»[38] тип йөрөтәләр китапта — хәҙер китап һүҙе ул, Үҫәргәндең үҙе ул...

Әйт, тиһәгеҙ, әйтәйем, әйт, тиһәгеҙ, әйтәйем, илгә мәғлүм итәйем!

Асылыкүлдән ҡарпыған аҫыл конь-ат ярһыған — көн яғына тартылған. Аҫыл ир-ат (анат) Үҫәргән йүгән-эйәр кейҙергән — атланған шәп конь-атҡа — ир ырыҫы ҡанатҡа, юлланған тап көньяҡҡа. «Үҫәргән»дән — «Үһәргән», «Үһәргән»дән — «Үгүргән» тип әйтелеш үҙгәргән. Шул «Үгүргән» — «Гүргән» тип, ә торараҡ «Гиркан»[39] тип оло диңгеҙ аталған — Үҫәргәндәр диңгеҙе. Һәм көнсығыш ярында ҡалҡҡан Гүргән ҡалғаһе — Үҫәргәндәр ҡалаһы. Үҫәргән-дарья — Сурхандарья, Үҫәрдарья — Сәрдарья (Сыр-дарья), Үҫәргәндәр йылғаһы...

Әйт, тиһәгеҙ, әйтәйем, әйт, тиһәгеҙ, әйтәйем, илгә мәғлүм итәйем!

Шул Үҫәргән-Асарған һаман Үҫкән-артынған, көн яғына тартылған — Ил-Бүреәсә[40] тауына артылған ул, артылған. Илән-дәүләт ҡорорға, иләүләнеп торорға Ил-Бүреәсә тау буйында бер тоҡомон ҡалдырған — Бүреәсән[41] тоҡомон ҡалдырған. Бүреәсән дәүләте — «Бүреәсә иле» (Берсилип) тип аталған, маҡталған... Үҫәргән һаман артынған, артабан көнгә тартылған. Ҡаңғиратҡа[42] тауын артылған. Шунда дәүләт ҡорорға, иләүләнеп торорға Ҡаңғы ир-ат[43] ҡалдырған. Көнгә һаман тартылған, тартылған да тартылған. Үҫәргән, ти, бер заман үҙе һымаҡ Уралдан ҡуҙғынған бер ғәләмгә — Асабаар — Субар тип, Субар тип тә Шу-Сумар тип, Сумар тип тә Шумер тип аталған ҡан-ҡәрҙәштәр иленә, ти, Түгер[44] һәм Ифрат[45] йылғаларының аралында тарыған. Был саҡ Ғайса пәйғәмбәр тыуасаҡ бер йылғаса, әйтһәк әгәр китапса, беҙҙең эраға тиклем 24-се, ти, дәү быуат заманаһы, ти, булған. Сумар-Шумер батшаһы Олоуғылсаҡкеше[46], үҙ тәхетен ҡурсалап, бирешмәҫкә тырышҡан. Ә Үҫәргән-Асарған, ҡыҫҡа әйтһәк, ти, Сарған, ә китапса шул Саргон-батша килгән ҡомарып, алтын тәхет алам, тип. Шумер-батша һуғышҡан, йә Саргонды салам, тип, йә башымды һалам, тип. Әммә эйә Асар Аҡ, Үҫәргәнде ҡурсалап, Шумерҙы, ти, ҡыйратҡан. Сәр-ғәскәре Саргондың бөтә Кесе Азия ҡалаларын теҙләткән — Түгер, Ифрат буйҙарын Сәр[47] иленә ей иткән. Шунан һуң, ти, был ерҙе көллө күрше дәүләттәр Сәр Өйө[48] тип йөрөткән...

Әйт, тиһәгеҙ, әйтәйем, әйт, тиһәгеҙ, әйтәйем, илгә мәғлүм итәйем!

Ил-Бүреәсе, тау *буйлап* Бүреәсән-Бөрйән киткән, ти, ҡарап ҡояш байышҡа. Барып сыҡҡан юлайтҡан ер ҡапҡаһы Ҡапҡастан[49], Көләс-диңгеҙ[50] ягынан Бүреәсә[51] һыуы буйына. Көтөп шунда көтөүҙәр, игеп йәнә игендәр, һалып сала[52]-ҡалалар, үрсегән дә бүленгән Бүреәсән ике тармаҡҡа: берәһе киткән көнбайышҡа, икенсеһе көнсығыш — икеһе ике яҡҡа. Көнбайышҡа киткәне Балтик диңгеҙ буйында, Төньяҡ диңгеҙ ярында мәңгелеккә төпләнгән. Кәмә-елкән торғоҙоп, диңгеҙ кисеп, ил гиҙеп, ерҙәр асып данланған. Бүреәсәндән — Бүрҗән тип, бер ғәләме Бүрес тип, аҙаҡ килеп Прус тип ул халайыҡ аталған, яугир зат тип маҡталған. Әсә телен онотоп, күрше телен үҙ итеп, немец, француз, швед тип аҙаҡ үҙен атаған[53]. Әммә әсә теленән — Бүреәсән-Бөрҗән һүҙенән — тик һигеҙ йөҙ һүҙ генә был көнгәсә һаҡланған («Прус теле» китабына тупланған)...

Бүреәсән һыңар тармағы — көнсығышҡа тартҡаны — ҡайтып еткән боронғо атайсалы Уралға; ураланған урманға, Ағиҙелгә, тауҙарға, Исеме лә ҡалған, ти, «Бүреәсән»дән «Бөрйән»гә...

Бүреәсән-Бөрйәндән тағы төрлө заманда, икеһе ике Балҡанда ике Болғар[54] ҙа ҡоролған, дәүләт булып данланған[55]...

Әйт, тиһәгеҙ, әйтәйем, әйт, тиһәгеҙ, әйтәйем, илгә мәғлүм итәйем!

Үҫәргәндең ҡалдырған — Ҡаңғират тауға ҡаңғырған — Ҡаңғы ир-ат тармағы, тау буйына таралып, көнсығышҡа ҡараны. Ҡарай-ҡарай үтте ул, үҙенеке итте ул Инд йылғаһын кисәнсе. Ҡомалаҡ[56] тауға еткәсе йәннәттәй көр араны. Океанға түгелгән көр йылғаны арбаны; Үҙ исемен беркетеп, шул көр һыуҙы мәңгегә Ҡаңғы[57] тиеп атаны, шунда булды ватаны. Күршеләргә ҡыҙ биреп, үҙенә лә ҡыҙ алып, теле бергә буталды. Ул тел аҙаҡ китапса «санскрит» тип аталды, үле телгә һаналды. Әммә, уҡып ҡараһаң, «санскрит»та күрәһең бик күп беҙҙең ғәзиз һүҙ — башҡорт теле ятҡанды[58]...

Әйт, тиһәгеҙ, әйтәйем, әйт, тиһәгеҙ, әйтәйем, илгә мәғлүм итәйем!

Ҡаңғы ир-ат үлмәгән, теле уның бөтмәгән — мең-мең йылдар буйына тупраҡ уны күммәгән, күммәгән. Арба егеп бер заман, ҡаңғырышып бик яман, Ҡаңғы ир-ат ҡалдығы ҡайтып еткән Уралға — тәүге төйәктораға, мәңге тороп ҡалырға. Бөгөн дә ул көн итә, әсә телен үҙ итә, балаларын үҫтерә тәүбабалар төйәҫе Асылыкүл буйында, Ҡаңғы-Төркәй ерендә.

Әйт, тиһәгеҙ, әйтәйем, әйт, тиһәгеҙ, әйтәйем, илгә мәғлүм итәйем!

Асарғандан-Саргондан, аҙағыраҡ Сәр, Һундан күп тармаҡтар таралған, ҡәбиләләр яралған. Әммә ырыу йөҙрәһе һаман үҙен һаҡлаған — Үҫәргән тип аталған. Көньяҡ киткән юлынан ҡайтҡан кире төньяҡҡа — тәүтөйәге Уралға, мәңгелеккә торорға. Атайсал көньяғында — тас Үҫәргән юлында торалыр ул һаман да.

Әйттем һеҙгә бер юлды, тик бер юлды, бер юлды, ә ул юлдар дүртәүҙер: атайсалдың дүрт юлы дүрт тарафҡа илтәләр. Шул дүрт юлдың өс осо — өс ҡәбилә юлылыр. Ә дүртенсе тармағы, тармағының ослағы — мәңгелек туң төн яғы — Тәңрененең ул юлылыр. Өс ҡәбилә — өс таған — Атан-Тәңре улылыр, улылыр ҙа ҡыҙылыр. Ә дүртенсе ҡәбилә — Атан-Тәңре тотҡаһы — Асабалыр был ерҙә, бойороусы ул әсәүгә[59]: өс тағандың өҫтөндә ҡаҙан һымаҡ икән дә... Тимәк, быйа ни ғилла: дүрт юлда дүрт ҡәбилә — беренсеһе Асаба, ҡубынмай ул башҡаса — ҡала мәңге был ерҙә, хеҙмәтсе ул Тәңрегә. Икенсеһе — Абыҙ ул, көнсығышҡа уның юл. Өсөнсөһө — Үҫәргән, көньяҡҡа ул юл ярған. Дүртенсеһе Орос ул. Ырыҫ ул да Урыҫ ул, көнбайышҡа уның юл... Тағы шуны әйтәйем, дүрт тармаҡлы дүрт юлды тоҫмөрләтеп бирәйем: балаҫтарға баҫылған, аҫалара аҫылған, биҙәктәргә биҙәлгән сатраш-тәре булыр ул. Ә иң тулы һыҙаты — атабаба ҡеҙрәте — Асаба-Әстәк[60] булыр ул. Свастика[61] булыр ул! Свастика тимәктәр — башҡорттоң дүрт юлы ул, донъяның дүрт ҡулы ул — ишараты шуның ул!

Дүрт ҡәбилә юлының тик берәһен һөйләнем, хуҙаллатып көйләнем — ҡалған өҫкә теймәнем. Кәрәк булһа, бер заман уларын да һөйләрмен, көйләрмен...

Әйт, тиһәгеҙ, әйтәйем, әйт, тиһәгеҙ, әйтәйем, илгә мәғлүм итәйем!

Мин, Асар Аҡ, асыулы, йөрәккәйем ярһыулы — күлем шуға борсоулы, күгем шуға моңһоулы. Ни өсөн ул, тимәгеҙ — үҙегеҙҙән эҙләгеҙ болоҡһоуым сәбәбен. Һеҙ бит, һеҙ бит, әҙәмдәр, асһағыҙ ҙа ғәләмдәр, онотоғоҙ тарихты, тарих ҡылып бар-юҡты! Бабаларҙы онотоп, шәжәрәне он итеп, ил намыҫын көл итеп, халыҡтарҙың тамырын бер-береһән өҙҙөгөҙ. Мәсет, сиркәү төҙҙөгөҙ, ҡарыулашты дингегеҙ, тоташманы телегеҙ — «беҙ айырым!» тинегеҙ. Һәр кем данлап үҙ динен, һәр кем маҡтап үҙ телен, кеше телен телдегеҙ — телгеләнде илегеҙ, телһеҙләнде көнөгөҙ, күрегеҙ!.. Йәмле Һаҡмар буйҙарын, йәмле Ҡаҫмарт буйҙарын «Читпиртый» тип һөйләүсе тел үҙе, тим, теләнсе... Шул теләнсе телде лә тел осонан телгеләп ҡыҫҡартыусы мәркәҙдең теле лә, күр, ҡыҫҡара — ҡыҫмаҡлаусы ҡыуара... Ә бит ҙурлау, хурлауға лайыҡ түгел бер тел дә, бер тел дә! Барлыҡ булған телдәрҙең Тел-Әсәһе берәүҙер, берәүҙер! Тәүтел тигән бер телдер! Бар телдәр бер тоҡомдор, туғандыр!

Әйт, тиһәгеҙ, әйтәйем, әйт, тиһәгеҙ, әйтәйем, илгә мәғлүм итәйем!

Ибн-Фаҙлан килгәндә[62] Башҡортостан ерендә ул ғәрәпте бер башҡорт юл күрһәтеп оҙатҡан һәм һөйләгән юлайтҡан: башҡорт халҡы өс яҡлап өс юлға, тип, бүленә (ә дүртенсе юлды ул — Тәңре юлын әйтмәгән, туба[63] һалып телене). Шул өс юлдың берәһе табыналыр Йыланға, икенсеһе — Балыҡҡа, өсөнсөһө — Торнаға.

Әммә төптән тепсенһәң, өсөһө лә балыҡтан — Асар Аҡтан үрсегән, төрлө тоҫҡа үркегән, өс тармаҡҡа бүленгән — ер, һыу, һауа юлынан юлланыусы йәндәрҙер.

Асар Аҡ-ай — Сурағай, Сурағайҙан — Сура-Ҡай төшөнсәһе тыуғандыр һәм «Ҡай»ҙан «Ҡий» булғандыр. «Ҡий» һүҙе ул ҡыяуҙыр, хәҙергесә ҡаяуҙыр — сағыр йылан тешеләр. Шул «ҡий» һәм «лан» (улан) һүҙенән «Ҡийлан» килеп сыҡҡандыр, «Ҡилан» — «Йылан» булғандыр — ер йөҙөнә шылғандыр. Тимәк, «Ҡий» ул Йыландыр. Ә бөгөнгө ҡыйғылар[64] — «Ҡий»ға борон табынған дәү тоҡомдоң затылыр...

«Асар Аҡ»ты «Асаҡ» («Әсәк») тип ҡыҫҡартыуҙан «Сәк» сыҡҡан, «Шәк» тыуған.

«Шәк» балығы хәҙерге телебеҙҙә — «Сөг»әлер, ә сыуашса — «Жәк»әлер, ә урыҫса «Щук»әлер, һыу эсендә күлкәләр. Сөгә балыҡ-эйәгә табыныусы тоҡомдар «Сөг-ас» тиеп аталған. Аҙаҡ килеп шул «Сөг-ас» — «Сөуас» тип һәм «Сыуаш» тип бөгөнгәсә һаҡланған...

Асар Аҡтан — «Сараҡ» тип шул «Сараҡ»тан «Жерех» тип ағасаҡ (аҡ-асаҡ)[65] аталған, ә «Жерех-балыҡ» — «Журавлик», тора-бара «Журавль»[66], ә ҡай берҙә «Һоривль» булып телдә йөрөгән, күктә осоп көн күргән. «Һоривль»де «Һорив» тип, ә һуңыраҡ «Хорив» тип әйтеүселәр күбәйгән. Шул «Хорив»ҡа табынған — «хориван» тип тә аталған, «ҡарабан» тип тә аталған, «каруан» йөрөтөп маҡталған. Шул Хорив-Журавль-Торнабыҙ, Үҫәргәндең ҡошо, тип, шәжәрәгә яҙылған...

Әйтеп бирҙем мин һеҙгә Ибн-Фаҙлан теркәгән Балыҡ, Йылан, Торнаны — Шек, Кий, Хорив эйәне. Зирәк йәндәр һеҙҙәләр: был өс эйә исеме тарихтарға ингәндер, һыу. Ер. Һауа тотҡаһы — Щек, Кий, Хорив эйәбеҙ өсөһө лә бер булып, Днепрҙың буйында ете үркаҫ убала изге Орос (Русь) баш ҡалаһын — Кий-уба, Кийува тип, аҙаҡ табан Киев тип йөрөтөлмеш мәркәзе нигеҙләүсе һаналған, өсөһө лә данланған. Тимәк, Киев ҡалаһын — изге Рустең мәркәзен — өс ҡәбилә төҙөгән. Дүртенсеһе — Асаба — Тәңре һүҙен бойороп, күңелдәрен нурлаған...

Бына хәҙер әйтегеҙ, быйа хәҙер әйтегеҙ, бер түгел тип [illegible], бер түгел тип телегеҙ... Тарихтарын онотҡас, бер-берен ҡыйырһытҡан, ҡыйырһытҡан да ҡыйратҡан улдар булып ҡуймағыҙ, телдәр булып ҡуймағыҙ. Һәр беребеҙ — бер төптән, бер тигеҙбеҙ — буй, телдән, тиңдәш беҙ тип уйлағыҙ, телдәш беҙ тип һанағыҙ. Үҙ ерегеҙ — ер килеш, үҙ көнөгөҙ — көн килеш, үҙ буйығыҙ — буй килеш, үҙ телегеҙ — тел килеш ерҙең йөҙөн нурлағыҙ, мәңгелеккә буйлағыҙ, буйлағыҙ!

ИҪКӘРТМӘЛӘР:

[35] Ҡасҡар — Бүре (бабалар һуғышсыны шулай атаған); ҡасҡар һүҙе аҙаҡ ғәскәр рәүешендә үҙгәргән.

[36] Ҡый-суп — үлән тигән һүҙ, һыуғамыш (папирус).

[37] Бауға (бәйгә) элгән — бәйге елгән, тигән төшөнсә шунан (ҡояштың күк йөҙө буйлап елеүе).

[38] Ант, анты — боронғо Үҫәргән тоҡомоноң көнбайышҡа олағып Днестр менән Днепр араһында һәм Днепрҙан көнсығыштараҡ төпләнгән, III—IV быуаттарҙа шунда үҙ дәүләтен ҡорған тармағы — буласаҡ көнсығыш славян бабалары (ҡәрҙәш саҡлабандар менән берлектә). VI—VII быуаттарҙа уларҙың Бөж(ән), Арҙағәсәт, Бүрегәсәт исемле ҡеҙрәтле батшалары; Иҙәрәй, Көләгәсәт атлы бейҙәре; Хәлбоҙай, Дәборәгәсәт (Дәү-бүре-әсәт) тигән сәрҡасҡарҙары һәм Мөкәмир тигән атаҡлы дипломаты (илсеһе) булғанлығы билдәле. 550—551 йылғы һуғыштан һуң анттарҙың бер өлөшө Балҡанда (хәҙерге Болгария) тороп ҡала. VII быуат баштарында анттарҙың исеме онотола, элек улар төйәкләнеп донъя көткән буйҙарында ҡәбиләләрҙең яңы берләшмәһе Русь барлыҡҡа килә. Бының бер ҡыҙыҡ билдәһен беҙ иҫке «көн-ат» («конь-ат») терминының үҙебеҙ белгән «ат» атамаһы таңғәләндә икегә ярсылыуында ла күрәбеҙ. Тәүге яртыһы «көн» («конь») урыҫҡа, ә икенсе яртыһы «ат» үҙебеҙгә хеҙмәт итә бөгөн дә.

[39] Гүргән, Гиркан — Каспий диңгеҙенең боронғо бер исеме.

[40] Ил-Бүреәсә — Эльбурс тауы.

[41] Бүреәсән — башҡорттоң Бөрйән ырыуы.

[42] Ҡаңғират — Кухруд тауы.

[43] Ҡаңғы ир-ат (ҡаңғират, ҡуңрат, кунгират) — башҡорттоң Ҡаңғы ырыуы.

[44] Түгер — Тигр йылғаһы.

[45] Ифрат — Евфрат йылғаһы.

[46] Олоуғылсаҡкеше (Оло-уғылсыҡ-кеше) — Лугальзагисси тип уҡыйҙар был исемде бәғзеләр балсыҡ китаптан.

[47] Сәр — Үҫәргәндең ҡыҫҡартып әйтелеше.

[48] Сәр Өйө — Сирия.

[49] Ҡапҡас — Кавказ тауҙары.

[50] Көләс-диңгеҙ (иҫке грек яҙыуҙарында Гелис-понт) — Ҡара диңгеҙ.

[51] Бүреәсән (иҫке грек яҙыуҙарында Борисфен) — Днепр йылғаһы.

[52] Сала — село, ауыл.

[53] Скандинавия халыҡтары үҙҙәренең бабаларын Скифия төркиҙәре тип таный (Е. А. Мельникова. Древне-скандинавские географические сочинения. М., 1986, 53-сө бит).

[54] Болғар — шул уҡ «Бөрйән» тигәндең үҙгәртеп әйтелеше.

[55] Балҡан таулы Ағиҙел — Ҡама буйындағы Болғар дәүләтендә, көнбайышта Балҡан ярым утрауындағы Болгария дәүләтендә — икеһен тиң бөрйәндәр ҡорған (Т. М. Калинина. Сведения ранних ученых Арабского халифата. М., 1988, 17, 32, 48, 92, 93, 95, 130, 136, 137-се биттәр).

[56] Ҡомалаҡ — Гималай тауҙары.

[57] Ҡаңғы — Ганг йылғаһы.

[58] Үле тел һаналған «санскрит»та мендән артыҡ бөгөнгө башҡорт һүҙе бар.

[59] «Батшалыҡ итеүсе скифтар» тип йөрөтөлгән тоҡом. Ҡарағыҙ: Геродот. История, IV, 20.

[60] Асаба-Әстәк — һәм «Асаба» (аҫаба), һәм «Әстәк» (истәк, иштәк) бер үк «башҡорт» тигән һүҙ.

[61] Свастика — «Асаба-Әстәк» — «Сабастәк»тең үҙгәртелеберәк әйтелеше.

[62] 922 йыл.

[63] Туба — табу тип әйтелә ғилми әҙәбиәттә (тыйыу тигән мәғәнәлә).

[64] Ҡыйғылар — Ҡыйғы ырыуы, хәҙерге Ҡыйғы районы кешеләре (БАССР).

[65] Ағасаҡ (аҡ-есәк) — русса «жерех» балығы.

[66] Журавль (русса) — торна, «торна» һүҙе иҫке төрки телдә «терна» әйтелгән һәм «бер ҡорға туплаусы» тигәнде аңлатҡан.

Йыһат СОЛТАНОВ.

Шәйехзада БАБИЧ

ОЛО БАЙРАМ

Яңғырап, шаулап сыҡҡан шатлыҡ хорын
Фәрештәләр һөйөнөп тыңлаһын,
Шатландырҙың, тәңрем, һибеп нурың
Башҡортостан халҡы донъяһын.
Жәбрә ил мәлик хыялланып аппаҡ ҡанат
Осоп йөрөһөн Башҡортостанда,
Хәбәр бирһен тейеп: «Булдың азат!
Сыҡтың йәмле, гөллө бостанға».
Азат булды ғәзиз Ҡаруан-һарай,
Азат булды барлыҡ ерҙәрең,
Йырлап ебәр һөйөнөп, уйнат ҡурай
Сыҡһын тиҙерәк шатлыҡ йырҙарың!
Теләктәрең алға килеп тора,
Азатлыҡҡа ошо ғәләмәт.
Айнып тора, тулап ҡунып тора
Киләсәк ялҡыны сәләмәт,
Бәхет ҡыҙы матур йөҙөн асып
Һиңә табан көлөп боролдо.
Шатлан, уйна, һикер ярһып-ярһып,
Күпме шатланһаң да урынлы.
Еләм, ташам, тормайым, ашам күккә
Үкенмәйем инде үлһәм дә...
Үкенмәйем инде туған йортҡа
Күккә ҡарап көлөп торһам да.

Ш. Бабичтың билдәле булмаған шиғыры

Тарихи яҙма сығанаҡтарҙан билдәле булыуынса, башҡорт халҡының мәшһүр шағиры Шәйехзада Бабич 1917 йылдың йәйендә үк милли хәрәкәттә актив ҡатнаша. Ул З. Вәлидов, Ш. Манатов, Н. Таһиров кеүек зыялылар менән бергә башҡорт халҡының автономияһы өсөн көрәшә. Ләкин батша хөкүмәте иҙелгән халыҡҡа автономия бирергә ашыҡмай. Тик Бөйөк Октябрь революцияһын башлап ебәргән 7 ноябрҙәге ҡоралды восстаниенан һуң ғына автономия идеяһын тормошҡа ашырыу мөмкинлеге тыуа. Ошо сәбәпле 1917 йылдың 15 ноябрендә башҡорттар исеменән халҡыбыҙҙың берҙән-бер үҙаллы политик ойошмаһы булған үҙәк милли шура Башҡортостанды автономия итеп иғлан итә. Был турала «Правда» газетаһы 1917 йылдың 22 ноябрендә информация бирҙе һәм шуның менән Совет власының башҡорт халҡының автономияһы барлыҡҡа килеүенә риза икәнлеген күрһәтте.

Был ваҡиға, әлбиттә, быуаттар буйы иҙелеп килгән халыҡты иҫ китерлек ҡыуандыра һәм көслө энтузиазм тыуҙыра. Халҡы өсөн янып-көйөп йөрөгән Шәйехзада Бабич, ҡыуанып-кинәнеү генә түгел, үҙен сикһеҙ бәхетле итеп тоя һәм «Оло байрам» тигән шиғыр яҙа. Был шиғыр 1917 йылдың йәйендә сығарыла башлаған «Башҡорт» газетаһының 27 ноябрҙә сыҡҡан 13-сө һанының беренсе битендә баҫылған. Шиғырҙың алдынан ҙур хәреф менән яҙылған ошондай һүҙҙәр бар: «15 ноябрь Башҡортостан автономияһы иғлан ҡылынды вә Ырымбур вилайәтендә (өлкәһендә — **В. Д.**) ғәмәлгә ҡуйыла башланы. **16 ноябрҙә** Ҡаруан-һарай мәркәз Шура ҡулына керҙе вә мосолман ғәскәрҙәре ҡарауылға ҡуйылды»

Д. ВӘЛИЕВ,
философия фәндәре докторы, БДУ профессоры.



Гөжләп, өҙләп өҙөлгәндә
Ҡыңғыратып моң һыҙ.
Ҡыңғыратып моң һыҙ,
Әй, илһамлы ҡумыҙ!

Күңелдәрҙе сафландыр ҙа
Ғәмдәр уят, сиртеп.

Йәншишмәләй халҡым рухы,
Китһен йәндә тиртеп.

Х. ҒИНДУЛЛИН.

Р. ГӘРӘЕВ фотоэтюды.

Яҙылмаған бер тарих әҙенән

(эссэ)

«Беҙҙең иң әшәке эске дошманыбыҙ — бюрократ».
(В. И. Ленин).

ҺӘР ЯҘМАНЫ башлауы ҡыйын. Ҡәләм алғансы йөҙ михнәткә төшәһең, башыңда мең уй сыбарлана. Был мәҡәлә лә еңел тыуманы, баштараҡ экологик проблемалар хаҡында һыҙғалап ултырҙым: Ағиҙел, Иштуған диңгеҙе, Асылыкүл, Инйәр, Һаҡмар, Өршәк, Ыҡ, Яйыҡ һәм бүтән тәбиғәт ынйыларыбыҙ... Ләкин балҡыйҙармы һуң улар бөгөн? Һүрелеп баралар...

Ошо һүҙҙәрҙе яҙғанда, Үҙәк радио Үзбәкстанда Арал диңгеҙен ҡотҡарыу өсөн йәмәғәт комитеты төҙөлгәнен һөйләп тора ине. Унда үзбәк интеллигенцияһының йөҙләгәнсә вәкилдәре ҡатнаша икән.

Ә беҙҙең республикала Ағиҙелде Минводхоз вәхшилегенән ҡотҡарыу өсөн комиссия төҙөп буламы икән, милли интеллигенция вәкилдәренән? Әллә интеллигенциябыҙҙың мейеһен Өфө, Стәрлетамаҡ, Салауат, Мәләүез, Ишембай заводтарының зарарлы газы бөтөнләй томалағанмы?

Башҡорт интеллигенцияһы...

Их, ниңә хәҙер торғонлоҡ осоро түгел икән! Ул саҡта мин: «Әлхәмделилла, гәрсәһе лә [illegible] да гел. Башҡортостаныбыҙ — Гөлбостаныбыҙҙа фәләнсә фәлән духтырыбыҙ, төгәнсә артисебеҙ, бер рота яҙыусыбыҙ, бүтән ғалимдарыбыҙ, рәссамдарыбыҙ, уҡытыусыларыбыҙ, табибтарыбыҙ, мөһәндистәребеҙ, вә башҡа төрлө белгестәребеҙ бар бит! — тигән ғорур юлдарҙы теҙәр инем. — Милләтебеҙҙең ағылдары һәммәһе лә дәррәү сәскә ата, емештәренең дә өлгөргәне бешеп тора, йә хоҙай. Ә теге, ул уҡымышлы ағай-эне бик олоғайып киткән икән дәһә тимәгеҙ, ней, улар һаман да типһә тимер өҙәрлектәр ул! — тип шаулап ебәрһәң. — Бигерәк тә тимерҙең тутығын, игән йоҡартылғанын ҡуйһаң...».

Автор етди һөйләшеүҙе мәрәкәгә тәгәрәтеп памфлетҡа ауып бара тип уйламағыҙ тағы! Әҙиптең әслүб, йәғни стиль бер төрлөлөгө лә ялҡыта бит. Ә күҙ йәштәре аша көлә белеү — сатираның иң әсе төрө. Шуға күрә лә йөрәк яныуҙарын бер аҙ тынысландырыу өсөн бер аҙ мәсьәләнең тамырҙарына ҡағылып алайыҡ.

ИНТЕЛЛИГЕНТ, интеллигенция һүҙе төптө рус һүҙе, уны ҡулланышҡа үткән быуаттың 60-сы йылдарында яҙыусы П. Боборыкин индергән. Уның тамыры: аңлай алыусы, фекерләүсе, аҡыл эйәһе тигәнде аңлатҡан латин һүҙе «интеллектуска» барып тоташа. Тимәк, интеллигенция үҙ сафтарында даими рәүештә ҡатмарлы аҡыл эше, ижад менән шөғөлләнеүселәрҙе, мәҙәниәтте үҫтереүсе һәм уны таратыусы кешеләрҙе берләштерә.

Башҡорт интеллигенцияһы ла 18 быуат аҙағында ойоша башлай. Уның күренекле вәкилдәре: Аҡмулла, Мирсалих Биксурин, Зәйнулла ишан, Ғайса хәҙрәт, мофтөй Риза Фәхретдинов, кантон Мөхәммәтсәлим Өмөтбаев, мөғәллим Ғәли Соҡорой, Сафуан Яҡшығолов һәм бүтәндәр. Бөтәһе лә мулла йә хәҙрәт булғас, улар күп ваҡыт, бигерәк тә вульгар социология хөкөм ҡылған саҡта, ситкә ҡағылып килде. Халҡыбыҙҙың ул зыялыларының, аң эйәләренең иҫтәлеген тергеҙеү процессы яңы башланып ҡына тора.

Шәһит Хоҙайбирҙин, Шәйехзаҙа Бабич, Шәриф Манатов, Бәһау Нуриманов, Мөхәммәтша Бураңғолов, Бәхтегәрәй Шафиев, Муса Мортазин ишеләр хәтәр дауыллы революция йылдары ҡаһармандары. Башҡорт интеллигенцияһының тарихы, дөрөҫөн әйткәндә, бик аҙ яҡтыртылған. Ни өсөн? Бөгөнгө уҡымышлылар үҙҙәренең рухи тамырҙарын тәрән белеп, бик ғорурланып китмәһендәр өсөндөр, бәлки? Сөнки, интеллигент иң тәүҙә фекерләү һәләтенә, үҙ позицияһын билдәләүгә эйә, тимәк, ул үҙенең ошо сифаттары менән йәмғиәттең иң емерткес, иң консерватив ҡатламына — бюрократияға ҡаршы тора.

Тарих — ул туҡтауһыҙ рәүештә интеллигенция менән бюрократияның аяуһыҙ көрәше. Бөйөк Октябрь революцияһы ла Ленин етәкселегендә эшсе синыфтың буржуаз бюрократияны тар-мар итеүенән башланып китте. Ләкин тора-бара, бөтә хөкөмдө үҙ ҡулына туплай алған Сталин партияның интеллигентлы ҡатламын юҡҡа сығарыуға өлгәште, артығынан тыш үҙәкләндерелгән команда-административ аппарат төҙөнө — нәтижәлә яңы совет бюрократияһы саманан тыш көсәйҙе.

Бөгөнгө көндә үҙгәртеп ҡороу өсөн барған көрәш, ана шул сталинизм мираҫы булып ҡалған, бар хакимиәтте үҙ ҡулына туплаған, үҙгәртеп ҡороуға ҡаршы аяуһыҙ тормоз булып ҡалҡҡан консерватив бюрократия менән ҡаты алыш бит ул. Ватаныбыҙҙа идара итеү органдарында 18 миллион әҙәм ултыра. Ҡайһы берәүҙәр, уларҙың ағын-ҡараһын айырмай, 18 миллион бюрократ тип тә ебәрәләр. Юҡ, аппарат эшсәндәре араһында ла намыслы, фиҙакәр хеҙмәткәрҙәр ҙә байтаҡ. Ләкин бюрократтар барыбер мах бирмәйҙәр.

Шуны ла иҫтә тоторға кәрәк, интеллигенция, интеллигентлыҡ ул айырым бер ижтимағи төркөмдө генә берләштермәй, уны ҡәтғи синфи рамкалар менән генә сикләп булмай.

Мәҫәлән, һуңғы ваҡытта совет ғалимдары коллективлаштырыу, колхозлашыу осоронда игенселек һәм малсылыҡ культураһын дөрөҫ аңлаған, ауылда аҡыл менән хужалыҡ итеүсе крәҫтиән интеллигенцияһы юҡҡа сығарылды, тип раҫлай. Ә ҡоро лозунгтар, саҡырыуҙар, тупаҫ уполномоченныйҙар менән генә иген үҫтереп булмай икән. Нимәгә был килтереп сығарғанын хәҙер беҙ аҙыҡ-түлек магазиндарының буш кештәләренә ҡарап беләбеҙ.

Эшсе синыф интеллигенцияһы революцияның төп көсө булғас, уны бөтөрөү еңел булманы. Ләкин уның 20—30-сы йылдарҙа етәкселек эшенә үрләтелгән сөлөшөн дә, үҙаллы фекер йөрөткән алдынғы, юғары квалификациялы, культуралы эшселәрҙе лә, уң йә һул тайпылыштарҙа ғәйепләнгәс, репрессиялар урап үтмәне. Ә һуғышты әйтеп тораһы ла юҡ, иң ҡыйыуҙар, иң аңлылар, иң намыҫлылар — фронтҡа ынтылдылар.

Әммә бюрократия үҙенең иң баш эймәҫ дошманы — эшсе синыфы икәнлеген яҡшы аңлай ине, шуға ла ул «ижтимағи ғәҙеллек» тигән саҡырыуға ышыҡланып торғонлоҡҡа сыҡҡас, эшсе интеллигенцияға ҡаршы «тигеҙләүселек» йәғни «уравниловка» тигән бик мәкерле ҡорал ҡулланды. Тигеҙләп түләү эшсе намыҫына бик емерткес тәьҫир итте һәм кадрлы эшсе синыфтың абруйын төшөрҙө, сөнки шәхестең, оҫталыҡтың бәҫен ебәрҙе. Был күренеш бигерәк тә етмешенсе йылдарҙа киң таралды һәм экономикабыҙҙы көрсөккә килтереп терәне.

Иҫәбеҙгә төшөрәйексе, әүәлерәк ауыл халҡы эшсе һөнәренә айырым бер ихтирам менән ҡарай ине. Заводта эшләй, ҡатмарлы техника менән аралаша! Тик, тора-бара, ауылда уртаҡул йомошҡа саҡ яраған Ишәй менән Ҡушай ҙа ҡалаға китеп, эшсе синыф сафтарын тулыландырып ебәрмәһенме! Ҡыйыш һалынған кирбес, шалтырап торған комбайн, ҡараҫҡыға ғына кейҙерерлек винжәк — ана шул «тигеҙләүселек» емештәре. Бракодел иһә бюрократтың иң тоғро союздашы, сөнки улар икеһе ҡаҡшамаҫлыҡ берлектә эшсе синыфты тарихи бурысынан тайпылдырып, абруйын төшөрттөрөп, уның прогрессив үҫешен тышауларға ынтылды. Әгәр ҙә эшсе үҙе ихтирам итерлек шарттарҙа эшләмәй һәм йәшәмәй икән, уның ижтимағи аң-зиһенен буш лозунгтар менән шаңғыртып, пролетариаттың политик ролен сикләргә лә була, тип фекерләне бюрократ. Был тарҡатыу эшендә йәмғиәттең емерткес дошманы, ижтимағи ағыу — алкоголь да бик оҫта ҡулланыла килде. Бюрократ ҡатлам бөтә ойоштороу көсө менән эшсе синыфты ғыңлаусан, битараф, миңрәү көтөүгә әйләндерергә тырышты.

Был итәш интеллигенция хаҡында яҙам, тип бюрократия тарихына төштә лә китте тип әйтер ине иғтибарлы уҡыусы. Әйе, интеллигенция проблемаларын яҡтыртҡанда, уның өҫтөндә ҡамсы уйнатып торған бюрократияны һис онотоп булмай шул. Хәйер, бөгөнгө көн уның ҡамсыһы ла бик уйнамай, сөнки ул, үҙ ваҡытын көтөп, өҫтәл тартмаһында ята.

(Дауамы бар).

Вил ҒҮМӘРОВ

• Почтанан

МҮКЛӘНМӘҺЕН КҮҢЕЛЕБЕҘ

«Бер телдән дә телем кәм түгел».

Ятҡан таш мүкләнә, тип боронғолар белмәй әйтмәгәндәр. Әммә әйтер һүҙем, мине борсоған нәмәләр таш тураһында түгел.

Мин, бәләкәйҙән үк тип әйтергә була, юлдарҙа күп йөрөнөм. 4 класты тыуған ауылым Юлыҡ мәктәбендә бөтөп, Өфөгә уҡырға киттем. Поезда, автобуста, йә иһә атта ҡайтып барғанда, йәйәү йөрөгән саҡтарымда өлкәндәрҙе ололап «ағай», «апай» тип әйтеүҙе бурысым тип һанай инем. Һәм әле лә шул уйҙамын. Сөнки үҙен-үҙе ихтирам иткән һәр кеше, тәрбиәле әҙәм балаһы оло кешегә хөрмәт йөҙөнән ололап, ә кеселәргә кеселекле итеп яратып өндәшергә тейеш. Бәләкәстәргә туғаным, һеңлекәш, һылыу, ҡустым тиһәң, уларҙың ҡанаттары үҫеп, күңелдәренә йылы инеп китә бит...

Эйе, йөрөгән таш шымара. Өфө менән ауылым араһын аҙ тапамаһым. Әлегә йәшем 30-ға етмәһә лә, оло кешеләр менән һөйләшкән саҡта инәй, олатай, ағай, апай тип өндәшер булдым. Сөнки шулай тәрбиә алғанмын. Ғөмүмән, беҙҙең башҡорт халҡы яғымлы һүҙҙәргә һаран түгел, киреһенсә, ифрат бай, йомарт бит уның күңеле. Тик үҙеңдең генә эсең ҡара булмаһын.

...Өфөләге бер магазинға килеп индек. Һатыусы ҡатындың Урал арьяғы башҡорто икәнлеге әллә ҡайҙан күренеп тора. Витринаға яҡыныраҡ килеп: «Апай, анау ғына...» — тип башҡортса һорап та өлгөрмәнем, һатыусы ханым мине русса вата-емерә тетеләргә тотондо. «Какой я тебе еще апай? Посмотри на себя, деревня... Апай на базаре...»

Һатыусының һүгенеүенән, битәрләүенән уңайһыҙланып, беҙ, егеттәр, магазиндан сығып китергә булдыҡ. Аптырашта ҡалған кешеләр үҙ-ара мышҡым ғына: «Егеттәрҙең бер ғәйебе лә юҡ, ни бары апай тип кенә өндәшкәйне анау егет», — тип һөйләнә-һөйләнә сиратта тороп ҡалдылар. Саҡ ҡына һиҙемләгән булһам, уға апай тип өндәшеү түгел, бер һүҙ ҙә ҡушмаҫ инем. Яғымлы һүҙ өсөн шулай әрләнеп, битәрләнеп сығырыңды кем белһен инде.

Эйе, ауылдан ҡалаға килһәк, үҙебеҙҙең төйәкте, йәншишмәнән эскән һыуҙың тәмен, тыуған-тыумасаны онотмаһаҡ та, кисә генә өлкәндәргә ололап өндәшкәндә, уларҙың ихлас итеп «әү, туғаным» тип яуап биргәндәрен хәтерләмәҫкә тырышабыҙ, әрләнәбеҙ. Үҙ телебеҙҙең иң яҡшы йылы һүҙҙәрен — ауыл һөйләшендә кешеләр тарафынан иң йыш ҡулланыла торған өндәш һүҙҙәрҙе — хәҙер инде ҡалала ишетһәк, уңайһыҙланған булабыҙ. Әйтерһең дә, бындай һүҙҙе беренсе тапҡыр ишетәбеҙ. Әллә ҡала икмәге ата-әсәйебеҙ биргән тәрбиәгә шулай кире йоғонто яһаймы икән? Ниңә беҙ шулай һуң? Русса «девушка» тип әйтһәң, яуап бирәләр, башҡорт ҡыҙына «һылыу» йәки «апай», «һеңлем» тиһәң — ләм-мим!

Белһәк тә, белмәһәк тә руссалап һалдырабыҙ. Килешһә, килешмәһә лә «[illegible]» торғанды кейергә, ялтырап торғанын һөртөп биҙәнергә яратабыҙ. Был йәһәттән ҡалаға килгән күп кенә ауыл ҡыҙҙары бөтә көсөн, ваҡытын шуға бирә. Әлбиттә, бөтә кешене лә бер бизмән менән үлсәү — төптә хата булыр ине. Улай итә алмайым. Ошондай күренештәргә [illegible], эсенеп, көйөп йөрөгән ҡыҙҙар, егеттәр бар әле.

Уйланырға күп нәмә мәжбүр итә инде. Эшләгән ерҙә бер апай эш тәртибенең аңлашылмаған урындарын миңә яйлап ҡына төшөндөрә. Башҡортса иҫ киткес таҙа һөйләшеүенә аптырап, эшләр эшемде түгел, уны йотлоғоп тыңлайым.

— Аңланыңмы?

— Аңланым, апай. Рәхмәт, — тип бүлмәнән сығып ҡына бара инем:

— Фәнүр, һиңә нисә йәш әле, — тигән һорау мине шып туҡтарға мәжбүр итте. Йәшемде әйттем.

— Мин бит һинән ни бары өс йәшкә генә оло. Апай тип әйткәндәрен енем һөймәй, башҡаса улай тип өндәшмә. Исемем бар, исемем менән генә әйт, — тигәндәрен ишеткәс, кәйефем ныҡ ҡырылды. Ләкин һиҙҙермәнем. Хәҙер инде исеме менән өндәшеп:

— Ауылда ла бәләкәйҙәр исемегеҙ менән генә йөрөтәләрме? — тип бүлмәнән сығып киттем. Ауылда тыуып үҫкән, тәрбиәле ҡиәфәте лә, барыһы ла ауыл төҫтәре! БДУ-ның филология факультетын ситтән тороп тамамлаған, әммә юғары белем менән генә культуралы, әҙәпле булып булмайҙыр, күрәһең...

Яҙһаң, әлбиттә, бындай күренештәр икһеҙ-сикһеҙ. «Ҡаланыҡы» булып күренер өсөн, русса ғына һөйләшеп йөрөгәндәрен дә осратҡаным бар. Ә бит хәҙерге көндә, киреһенсә, ҡала балалары үҙ телендә һөйләшә алһын өсөн кластар, мәктәптәр асыла. Ҡала балалары үҙ телен өйрәнергә теш-тырнағы менән йәбешеп ятҡан мәлдә, ауылдан килгән беҙ, йүнһеҙҙәр, уларға ҡаршы һуҡыр политика алып барабыҙ түгелме? Ни эшләп ошо ябай ғына кәмәне аңлай алмай йонсойбоҙ? Ни эшләп үҙебеҙҙең туған телебеҙҙән оялабыҙ? Әллә башҡорт теле берәй башҡа телдән кәмме? Рәми Ғариповтың «Туған тел» шиғырын «Йәшлек» газетаһының беренсе битендә һәр номер һайын баҫып торһондармы әллә? Уҡытыусыларға ла бер тәҡдимем бар: туған тел дәрестәрен яңысараҡ үткәрһәләр ине. Әйтәйек, балалар, туған халҡының тарихын, телен һәйбәт белеп, мәктәп эскәмйәһенән үк башҡа милләттәр, бигерәк тә туғандаш, ҡәрҙәш халыҡтар хаҡында тейешенсә мәғлүмәт алһалар, киләсәктә милләт-ара мөнәсәбәттәр ҙә яҡшыра төшөр ине бит.

Донъяла бер тапҡыр ғына йәшәйбеҙ. Үҙ ғүмереңдә кеше туған халыҡтың тарих нигеҙенә бер таш һалып ҡалдырырға тейеш. Тик ниндәй таш? Уның да бит төрләһе була: ҡойола яҙып торғаны, мүкләнгәне, шымарып бөткәне. Ә нигеҙ ныҡлы булһа — ышаныслыраҡ. Беҙҙең быуын алдында ошо нигеҙҙе нығытыу бурысы тора. Уны тик оҫталар, үҙ эшен яҡшы белеүселәр генә һала ала. Шулай булғас, һәр беребеҙ туған телен үҙ эшен белгән кеүек белергә тейеш. Бер-беребеҙгә лә өлкән быуын кешеләре кеүек йылы итеп өндәшәйек, яғымлы һүҙҙәрҙән оялмайыҡ, ситләшмәйек! Бүрене бүреккә һалһаң да урманға ҡарай, тигәндәр боронғолар. Бына беҙ шулайыраҡ булырға тейешбеҙ. Яҙмыш ҡайҙа ғына ташлаһа ла, телебеҙҙе, тыуған төйәгебеҙҙе, халҡыбыҙҙы онотмайыҡ. Үрсейек, күрәйек, шунһыҙ булмай — был диалектика законы — хәрәкәт итергә кәрәк. Үҙебеҙ ҙә мүкләнмәйек, күңелебеҙ ҙә мүкләнмәһен!

Ф. ИСИРГАКОВ.

Өфө.

ГЛОБУС

ТАСС һәм АПН хәбәрҙәре буйынса

Башланғыс мәктәптә — детектор

1-се кластан 6-сы класҡа тиклем балалар уҡыған АҠШ-тың Бруклин ҡалаһындағы башланғыс кластарҙың береһендә тимер детектор барлыҡҡа килде. Хәүефһеҙлек служебаһы хеҙмәткәрҙәре уның ярҙамында уҡыусыларҙа һалҡын һәм утлы ҡоралдың булыу-булмауын асыҡларға ярҙам итә: «Табыш» үҙен оҙаҡ көттөрмәне. Тәүге көндә үк 12 йәшлек мәктәп уҡыусыһының сумкаһында пистолет патроны табыла.

Балаларҙан күпләп ҡорал табыу осраҡтары властарҙы ошондай кәҙәти булмаған саралар ойошторорға мәжбүр итте. Атап әйткәндә, март айында Бронкс ҡалаһы мәктәптәренең береһендә 14 йәшлек уҡыусыла хәрби патронлы браунинг табылған. Ошо уҡ айҙа полиция Бруклин мәктәптәренең береһендә ике уҡыусы ыҙғышып киткәс, булыуы ихтимал фажиғәне иҫкәртә. Малайҙарҙың береһенең кесәһендә пистолет табылған. Ә үткән йыл барышында ҡала мәктәптәрендә 200-гә яҡын ҡорал тартып алынған. Ҡаланың полиция идаралығы мәғлүмәттәре буйынса, ете йәштән алып 16 йәшкә тиклемге йәштәге ҡоралл балаларҙы ҡулға алыу һаны, 1987 йыл менән сағыштырғанда, 27 процентҡа артҡан.

Детекторҙарҙы мәктәптәрҙә урынлаштырыу балалар енәйәтселегенә ҡаршы көрәш буйынса Нью-Йорктың ҡала властары үткәргән киң программа рамкаларында бойомға ашырылды. Әгәр элек детекторҙар тик урта мәктәптәрҙә генә ҡуйылһа һәм 16—17 йәшлек өлкән класс уҡыусылары ғына контролдә тотолһа, хәҙер кескәйҙәргә лә сират етте. Был мәктәп осраҡлы ғына һайланмаған. 1988—89 йылдарҙа уҡыусыларҙан 49 бысаҡ тартып алынған. Был — ҡалалағы башланғыс мәктәптәр араһында иң юғары күрһәткестәрҙең береһе.

Бөгөнгө көндә Нью-Йорктың 15 мәктәбендә тимер детекторҙар урынлаштырылған. Әле улар булмаған мәктәптәрҙә мәктәп уҡыусыларына иртәнге «тентеү»ҙе махсус рәүештә әҙерләнгән полицейскийҙар үҙғара. Бөтә ҡабул иткән сараларға ҡарамаҫтан, балаларҙың утлы ҡоралдарҙы ҡулланыу осраҡтары артҡандан-арта. Тик һуңғы бер нисә ай эсендә генә тиҫтәнән ашыу яраланған мәктәп уҡыусыһы ҡала больницаларына оҙатылған. Үткән йылдың ноябрендә 15 йәшлек үҫмер иптәшен пистолеттан атып үлтерә.

Нью-Йорк Детройт ҡалаһынан һуң тимер детектор ҡуйылған икенсе ҡала. Йыл һайын ил буйынса утлы ҡоралдан 3 меңдән ашыу бала һәләк була. Был мәғлүмәттәр медицина статистикаһы Милли үҙәгенең докладында килтерелә. Шулай уҡ документта билдәләнгәнсә, донъяла үҫешкән дәүләттәр араһында АҠШ был йәһәттән беренсе урында тора, сөнки башҡа илдәрҙә балаларҙың пуля яраһынан һәләк булған осраҡтарын бармаҡ менән генә һанарлыҡ.

Белгестәр балалар енәйәтселегенең үсеүен беренсе сиратта ике сәбәп менән аңлата. Тәүге нәүбәттә — мәктәптәрҙә наркотиктарҙың таралыуы. Икенсе мөмкин булған сәбәп — телевизор экрандарынан күрһәтелгән көсләү күренештәренең балалар психикаһына кире йоғонто яһауы. Матбуғат мәғлүмәттәре буйынса, үҫмер мәктәп тамамлауға телевизорҙан 18 меңгә яҡын үлтереш күреп өлгөрә.

Әлегә илдә балалар енәйәтселеге үҫеүҙең сәбәптәрен асыҡлағанса, урындағы властар һәм мәктәптәр администрацияһы ҡулдан килгәнсә балаларҙы хәүефһеҙләндерергә тырыша. Ата-әсәләр ҙә детекторҙарҙы ҡуйыу ярҙам итәсәгенә ышана. Әммә ысынында иһә шулаймы икән? Белгестәрҙең күбеһе ҡоралдарҙы һатыуға контроль индерелһә генә ыңғай һөҙөмтәгә ирешеләсәк, тип иҫәпләй.

С. БАБИЧ.

Нью-Йорк.

ГФР. Бавария Эске эштәр министерствоһы мәғлүмәттәре буйынса, наркотиктар менән йәшерен һатыу иткән урында, үткән йыл 700-ҙән ашыу кеше «ак үлемдең» ҡорбанына әүерелде. Бөтә осраҡтарҙа ла самадан тыш күп наркотик ҡулланыу үлемгә килтергән. Наркоманияның бигерәк тә йәштәр араһында тиҙ таралыуы борсолоу тыуҙыра. Күп факттар раҫлауынса, ГФР был үлем ағыуының таралыуында үҙенсәлекле «оҙатыу пунктына» әүерелә бара.

ҺҮРӘТТӘ: наркоманка.

ТАСС фотохроникаһы.

ЛИВАН — оҙайлы һәм ҡанлы граждандар һуғышы менән өҙгөләнгән ил. Ҡорбандарҙың иҫәбе-һаны юҡ. Меңәрләгән кеше һуғыш ҡорбанына әүерелде, араларында балалар ҙа байтаҡ. Улар был фажиғәнең тере шаһиттары ғына түгел, күптәре алыш барған райондарға юлығып, һәләк була.

ҺҮРӘТТӘ: сараһыҙлыҡ һәм өмөтһөҙлөк, көсөргәнешле һәм ҡурҡыныс тормош — бөгөнгө Ливандың ысынбарлығы шундай.

ТАСС фотохроникаһы.

Этник конфликттар көсәйә

Женевала БМО бинаһын һаҡлаған полицейскийҙар өсөн тынғыһыҙ көндәр башланды. Милләттәр һарайы ҡапҡаһы эргәһенә йыш ҡына халыҡ йыйыла. Йә Косовола үҙ ватандаштарының яҙмышы менән борсолған албан эмигранттары протест белдерә, йә грек общиналарын яҡлап, урындағы гректар демонстрацияға сыға.

Милли үпкәләшеүҙәр. хатта халыҡ-ара форум кимәленә барып етте, унда айға яҡын инде кеше хоҡуҡтары буйынса БМО Комиссияһы ултырыш үткәрә. Уның көн тәртибендә туранан-тура этник конфликттарға арналған пункт юҡ. Үҙ эшмәкәрлеген артыҡ политикалаштырыуҙан хәүефләнеп, 43 ил делегаты — Комиссия ағзалары был сетерекле мәсьәләне тикшереүҙе кисектереп торорға ҡарар итте. Әммә шулай ҙа тормош был проблеманы ситләп үтмәүҙе талап итә.

— Донъяла этник конфликттар көсәйә бара,— тине миңә милли аҙсылыҡтарҙың хоҡуҡтарын яҡлау өлкәһендә махсуслашҡан, совет делегацияһы эксперты Владимир Володин. — Был күп йәһәттән демократия процесы, халыҡтарҙың һәм этник группаларҙың милли аңы үҫә барыуына бәйле. Башҡа сәбәптәр ҙә бар, әле уларын өйрәнәһе бар. Беҙҙе, Комиссия ағзаларын, ил әсәк борсой. Косово, совет Кавказ аръяғы, Македония кеүек «дөрләгән» региондарҙағы һуңғы ваҡиғалар бүтән илдәргә иҫкәртеү булып яңғырай. Этник талаштарҙы хәүефле һыҙыҡҡа еткерергә ярамай.

Кеше хоҡуҡтары буйынса БМО Комиссияһы милли конфликттарҙы был хәл менән осрашҡан дәүләттәр үҙҙәре хәл итергә тейеш тигән ҡараш та тора. Ләкин халыҡ-ара хоҡуҡтар нормаһы нигеҙендә алып барылырға тейеш. Бынан тыш, Комиссияла конфликтты киң тикшереү хәүефле. Был уны интернационаллəште р е ү г ә килтереүе ихтимал. Асылда халыҡ-ара масштабта теге йәки был яҡты хуплаған үҙенсәлекле «көйәрмәндәр партиялары» барлыҡҡа килеүе бар.

Шул уҡ ваҡытта донъя берекмәһенә лә был проблемаға битараф булырға ярамай. Шуныһы асыҡ: бер-береһенә бәйле булған донъя шарттарында теләһә ниндәй урындағы конфликт — бөтә кешелеккә хәүеф менән янарға һәләтле.

Милләтселектән дә ҡурҡыныс нәмә юҡ. Күп илдәрҙә, ҡағиҙә булараҡ, уны йәмәғәтселектең именлеге өсөн түгел, ә үҙ файҙаһына, мәкерле политик маҡсаттарҙа файҙаланалар.

Был көстәр иң мөһим хәҡиҡәтте онотоп ебәрә: шәхес хоҡуҡтарын төп сикләүсе — ул башҡа шәхестең хоҡуҡтары. Бер милләт иҫәбенә икенсе милләттың демократик мөмкинлектәрен киңәйтеү йәғни байытыу ауыр эҙемтәләргә килтерә.

Был идеяларҙың ҡайһы берҙәре «Милли, этник, тел һәм дини аҙсылыҡҡа ҡараған кешеләрҙең хоҡуҡтарын яҡлау тураһындағы декларация» проектында үстерелгән. Женевала БМО Комиссияһы яңыраҡ ҡына был документты ҡабул итте. Эштең уңышы өсөн хеҙмәттәшлек, халыҡ-ара тәжрибә менән уртаҡлашыу кәрәклеге көн кеүек асыҡ.

Совет матбуғатының Төньяҡ Ирландиялағы конфликтты яҡтыртмай башланыуында күрергә мөмкин. Киреһенсә, әлеге ваҡытта бөтөрелгән НКАО-ның айырым идаралығы комитетының элекке председателе Аркадий Вольский яңыраҡ биргән интервьюһында Ольстер менән Таулы Ҡарабах араһында параллель үткәрә. Тегендә лә, бында ла дошманлашҡан яҡтарҙың боевиктары актив, һәм хәрби контингентты ҡыҫҡартырға тырышыу яңынан һуғышына килтерә. Ольстер тәжрибәһе шулай уҡ Ҡарабахта референдум үткәреүҙең мәғәнәһеҙлегенә шик ҡалдырмай.

Ләкин был — аҙған сирҙең тәжрибәһе. Өҫтәүенә, этник талаштарҙы иҫкәртеү буйынса тәжрибә менән уртаҡлашырлыҡ илдәр бар. Атап әйткәндә, Ҡушма Штаттарҙағы, Бельгиялағы институттарҙы миҫалға килтерергә мөмкин.

Милләтселек эпидемияһын донъялағы тик берҙәмлек кес кенә туҡтата ала.

В. СИМОНОВ.

Женева.

ИҒТИБАР ИТЕГЕҘ: КОНКУРС!

Башҡорт АССР-ы Культура министерствоһы, БАССР Яҙыусылар союзы, БАССР Мәғариф министерствоһы, Профсоюздарҙың өлкә Советы, ВЛКСМ-дың Башҡортостан Өлкә Комитеты, БАССР Эске эштәр министерствоһы балалар һәм үҫмерҙәр өсөн бер актлы пьесаларға, театрлаштырылған тамаша, байрамдар сценарийҙарына республика конкурсы иғлан итте. Ул 1990 йылдың 1 сентябренә тиклем барасаҡ.

Уның төп маҡсаты — юғары художестволы һәм юғары идеялы бер актлы пьеса һәм театрлаштырылған тамаша, байрамдарҙың сценарийҙарын яҙыуға булышлыҡ итеү.

Конкурста теләгән һәр кем ҡатнаша ала.

Әҫәрҙәрҙе баһалағанда уларҙың актуаллеге, теманы асыуы, образдарҙың художестволы тасуирланыуы, балалар һәм үҫмерҙәргә аңлайышлы булыуы, авторҙың темаға мөнәсәбәте, әҫәрҙәрҙең тәрбиәүи әһәмиәте иҫәпкә алына.

Конкурста быға тиклем матбуғатта донъя күрмәгән, сәхнәлә башҡарылмаған, радио һәм телевидение аша тапшырылмаған пьесалар һәм сценарийҙар ҡабул ителә.

Ҡульяҙмаларҙы машинкала ике интервал аша башҡорт телендә баҫып, өс данала 1990 йылдың 25 августына тиклем «конкурсҡа» тигән билдә менән Халыҡ ижады һәм культура-ағартыу эштәре буйынса ғилми-методик үҙәгенә түбәндәге адрес буйынса ебәрегеҙ: **450008, Өфө ҡалаһы, Пушкин урамы, 106-сы һанлы йорт, 33-сө бүлмә.**

Ҡульяҙмалар девиз менән (авторҙың фамилияһын күрһәтмәйенсә) ебәрелә. Шундай уҡ девиз менән йәбештерелгән конверт эсендә автор тураһында белешмәләр (исем-фамилияһы, атаһының исеме, эшләгән урыны, вазифаһы, адресы) булырға тейеш.

Жюри тарафынан иң яҡшы тип табылған әҫәрҙәр авторҙарына түбәндәге премиялар ҡаралған:

Бер актлы пьесалар өсөн:
ике беренсе премия — 700-әр һум;
ике икенсе премия — 500-әр һум;
ике өсөнсө премия — 300-әр һум.
Сценарийҙар өсөн:
бер беренсе премия — 500 һум;
бер икенсе премия — 300 һум.

Иң үҙенсәлекле пьеса (сценарий) авторына сит илгә льготалы путевка ҡаралған.

Шулай уҡ иң йәш автор 300 һумлыҡ ҡиммәтле приз менән бүләкләнәсәк. Хоҡуҡ һаҡлау темаһына арналған пьесалар (сценарийҙар) өсөн дә махсус премиялар бүленгән.

Конкурста еңеүсе пьесалар һәм сценарийҙарҙың иң яҡшылары Халыҡ ижады һәм культура-ағартыу эштәре буйынса ғилми-методик үҙәк тарафынан һатып алынасаҡ, айырым йыйынтыҡ булып баҫтырылып үҙешмәкәр театр коллективтарына тәҡдим ителәсәк.

Ф. НОҒОМАНОВА,
ғилми методик үҙәктең репертуар бүлеге редакторы.

БАШҠОРТОСТАН ИЛСЕЛӘРЕ

ТУҒАН ТЕЛ — һәр бер милли культураның мөһим сағылышы. Үҫеп килгән йәш быуын һәм, ғөмүмән, халыҡ алдында яуаплылыҡ тойоп, беҙҙең мәктәп коллективы башҡорт телен өйрәнеүгә күп көс һала. Шулай уҡ милли мәҙәниәттең бер өлөшө булғанлыҡтан, үҙешмәкәр сәнғәткә лә ҙур иғтибар бирелә. Яңы йыл башында беҙҙең мәктәпкә Башҡортостандан Фәтҡуллиндар ғаиләһе эшкә килде. Урал Мофағилович һәм Альбина Йәһүҙовна әлегә көндә БДУ-ла ситтән тороп уҡып ҡына йөрөһәләр ҙә, ҡаушап ҡалмаған.

Урал — Башҡортостандың Салауат районы Арҡауыл, ә Альбина Баймаҡ районы Аҡморон ауылынан. Был хәл беҙҙең коллектив һәм улар өсөн дә бик ҡыуаныслылыр. Бит уларҙың ғаилә тормошо ла, хеҙмәт юлы ла ошонда башланды. Йәштәр һуҙып-нитеп тормай, тиҙ генә эшкә тотоноп китте. Ғаилә башлығы башҡорт теле һәм әҙәбиәтенән, ә Альбина Йәһүҙовна немец теленән уҡыта. Фәтҡуллиндар килеү менән мәктәп тормошо тағы ла күңелләнә, йәнләнә төштө. Улар икеһе лә ҡурайҙа уйнай, беҙҙең яҡта был бигерәк тә һирәк күренеш. Урал башҡорт халыҡ бейеүҙәрен оҫта башҡара, ә кәләше Альбина — йырсы һәм нәфис һүҙ оҫтаһы. Был һөнәрҙәрен улар районда күрһәтеп тә өлгөрҙө инде.

— Беҙ Өфөлә педагогия институтының икенсе курсында уҡығанда студенттар инициативаһы менән филология факультетында «Умырзая» тигән драма түңәрәге төҙөлгәйне. Спектакль һәм концерттар менән беҙ Башҡортостан буйлап йөрөнөк, — тиҙәр улар. — Диалектологик экспедиция ваҡытында Таулы-Алтай республикаһында ла үҙ һөнәребеҙҙе күрһәтеп ҡайттыҡ.

Йәш уҡытыусыларға артабанғы эштәрендә ижади уңыштар һәм бәхет теләйек.

Н. ИШБУЛДИН.
Силәбе өлкәһе,
Ҡоншаҡ районы,
Ибраһим ауылы.

«Ҡасан ҡар бөтә инде...» **А. ВИНОГРАДОВ** фотоэтюды.

СПОРТ

Ярыштарҙа сыныҡҡан дуҫлыҡ

Башҡорт дәүләт университетында яҙғы ярыштар һәм уйындар башланды. Шуларҙың иң ҡыҙыҡлыһы — факультеттар араһындағы мини-футбол буйынса көс һынашыу.

Университеттың футбол майҙансығы төрлө төҫтәге плакат тотҡан көйәрмәндәр менән тулған. Тарих һәм физика факультеттарының футбол «фанаттары» уйындарҙың барышын үҙ ятаҡтарынан сыҡмай ғына бүлмәләренең тәҙрәләренән күҙәтәләр — спорт майҙаны ус төбөндә генә ята. Ә ҡалған факультеттарҙың көйәрмәндәре уйындың барышын «трибуналарҙан» ҡарай.

Бөтә туғыҙ факультеттан ике төркөм яһалды. Беренсе «А» төркөмөнә тарих факультеты студенттары, физиктар, биологтар, математиктар һәм географтар инде. Ә инде «Б» төркөмөн филология, ФРГФ, химиктар, юридик факультеттың студент командалары тәшкил итте. Уларға шулай уҡ университеттың комсомол ойошмаһы комитеты командаһы ла ҡушылды. Уйындар бик мауыҡтырғыс, көсөргәнешле барҙы. Командалар уйынға ярайһы уҡ яҡшы әҙерлек менән килгәйнеләр. Уйынсыларҙың күбеһе 5-се курс студенттары. Улар өсөн был ярыш айырыуса яуаплы һәм ҙур әһәмиәткә эйә: һуңғы сығыштар күңелдәрҙә яҡты иҫтәлек булып ҡалһын өсөн бигерәк тә тырышып уйнарға тура килде. Һәм егеттәрҙең күбеһе үҙ маҡсаттарына ирешеп лә инде. Филология факультеты студенты А. Шиһабетдинов, А. Дүшәнбаев; физиктарҙан А. Әлмөхәмәтов, Х. Кәримов, И. Бәҙретдиновтар; математика факультетынан Абдрахмановтарҙы айырып күрһәтергә кәрәк.

Ярым финал уйындарында, еншек ҡар яуып, майҙандың боҙлауыҡҡа әйләнеүенә ҡарамаҫтан, футболсылар тырышып, бөтә күңелдәрен биреп уйнаны. Әлбиттә, һәр ярышта ла иң көслөләр һәм етеҙҙәр еңеү яулай. Был осраҡта ла тап шулай булды. Ярым финалға «А» төркөмөнән физика һәм тарих факультеттары командалары, ә «Б» төркөмөнән юристарҙың һәм химия факультеттарының командалары сыҡты.

Ниһайәт, уйындың иң көсөргәнешле ваҡыты килеп етте — ул финал. Футбол майҙанында юристар һәм физика факультеттары уйынсылары осрашты. Был ҡыҙыу һәм хәл иткес алышта физиктар отҡорораҡ булып сыҡты. Әйтергә кәрәк, улар университет чемпионатында бишенсе йыл рәттән 1-се урынды яулап килде. Бына тағы ла улар — беренсе.

Былар менән генә университет ярыштары тамамланмаһы әле. Студенттарҙы алда ҡыҙыҡлы уйындар көтә. Призлы урындар күп булмаһа ла, ярыштарҙа еңелеүсе юҡ, сөнки саф һауа, сәләмәтлек, көр күңел, һәм, ахыр сиктә, һынауҙар аша сыныҡҡан дуҫлыҡ — үҙе ҙур бүләк ул.

И. ХӨББӨТДИНОВ,
БДУ-ның филология факультеты студенты.

• Былар ҡыҙыҡлы

БҮЛӘККӘ — «АЛТЫН КӨРШӘК»

Дунай буйы илдәрендәге иң яҡшы ашнаҡсылар «Алтын көршәк» призына йыл һайын үткәрелгән ярыштарҙа үҙҙәренең оҫталығын күрһәтә. Конкурста ҡатнашыусылар Дунайҙан тотолған балыҡтан ашамлыҡ әҙерләй. Югославияның Нови-Сад ҡалаһында уҙғарылған ярышта Будапешттан Миклош Месарош еңеп сыҡты.

ҺАНДЫҒЫ ЛА ҺАНДЫҒЫ...

Бынан ун биш йыл элек Хәсәйен Далви Бомбейҙа иҫке-моҫҡо менән һатыу итеүсенән тимер һандыҡ һатып ала. Ауылдарға алып барып икмәк һатыу менән шөғөлләнгән Далви йәшникте икмәк һауыты итеп файҙалана. Сауҙаны ҡалдырғас, һандыҡ бер нисә йыл буйы һарайҙа саң ояһы булып ята. Күптән түгел Хәсәйен һарайҙа ятҡан йәшникте иҫенә төшөрөп, уның таҡталарын өй ҡыйығын ябыу өсөн файҙаланмаҡсы була. Һандыҡты һүтә башлағас, төбөндә бик күп алтын һәм сәғәт таба. Йәшниктең иҫке-моҫҡо менән һатыу итеүсегә нисек барып эләгеүе асыҡланмаған.

ҺЫБАЙ... ИКЕ ҠИТҒА АША

Аргентинанан бер кеше үҙ иленең баш ҡалаһынан Мадридҡа тиклем барып етеү өсөн биш йыл да 7 ай ғүмерен сарыф итә. Ул Американың ике ҡитғаһы юлы буйлап 22 мең километрҙы һыбай үтә. Нью-Йорк портында ғына һыбайлыға һәм атҡа трансатлантик лайнер бортына ултырырға тура килә.

Төҙәтеү

«Йәшлек»тең 17 март һанындағы «Ҡәләмдәшкә асыҡ хат» мәҡәләһендә уңдан икенсе бағанала: «Монгол-татар иҙеүенә ҡаршы 300 йыл дауамындағы көрәштә» тип уҡырға кәрәк.

«Йәшлек»
ВЛКСМ-дың Башҡортостан
Өлкә Комитеты органы

БЕҘҘЕҢ АДРЕС:
450079, Өфө, Октябрҙең
50 йыллығы урамы, 13, 8-се ҡат.
Телефондар: 23-46-38, 22-56-45.

Газета шишәмбе, кесаҙна, шәмбе көндәрендә башҡорт телендә сыға.

Индексы — 50604.

Редакторы Б. НАЗАРҒОЛОВ.

КПСС-тың Башҡортостан Өлкә Комитеты нәшриәте типографияһы.

П04278. Заказ № 437.